ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

21-27 май (һабанай)

2022

№20 (1010)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Киләсәк мәктәбе тыуып килә...** 2-3



**Ярты быуаттан һуң...** тағы баш ҡалҡытты был яуызлыҡ 3,6



**Музей тип кенә ҡарама -** һәр экспонат бында тарих һөйләй 8-9



**Уҡырға ниәт итегеҙ,** ниәт хыялдарҙы тормошҡа ашыра 12-13



**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 757 һум 80 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең быйылғы 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Һуңғы ҡыңғырау" сараһы йәштәрҙе уҙаллы тормошҡа аҙына түгел, яңы маҡсаттар алдына ла баҫтыра түгелме?



***Дамир Вәлиев, Өфө ҡалаһының М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы уҡыусыһы:*** Ысынлап та шулай, "Һуңғы ҡыңғырау"ҙан һуң мәктәп тормошо тамамлана, студент тормошо башлана һәм беҙ үҙебеҙҙе өлкәнерәк итеп тоя башлайбыҙ. Беҙгә яңы мөмкинлектәр асыла һәм талаптар ҙа икенсе. Һәр кемебеҙ артабан эшләп, үҙен һәм яҡшы киләсәген тәьмин итерлек ниндәйҙер һөнәр үҙләштерәсәк.

Мин физика-математика йүнәлешендә белем алдым һәм физика, профилле математика, рус теле буйынса Берҙәм дәүләт имтихандары тапшырғандан һуң инженерҙар әҙерләгән факультетҡа уҡырға инергә ниәт итәм. Бала саҡтан һайлаған һөнәрем был, сөнки минең атай-әсәйем дә архитектура, художестволы сәнғәт өлкәһендә белгестәр. Мәктәп йылдарында мин черчение менән бик мауыҡтым, олимпиадаларҙа ҡатнашып, еңеүҙәргә лә өлгәштем. Шунан сығып та киләсәгемде инженерия менән бәйләргә теләк тыуҙы, яҡындарым да был миңә тап килә тип кәңәш итә. Дуҫтарымдың да пландары минекенә оҡшаш, улар ҙа имтихандарҙа юғары балл йыйырға, теләгән һөнәрҙәре буйынса артабан уҡырға инергә хыяллана. Күптәре программист булырға, параллель кластарҙа уҡыған дуҫтарым - табип, ә береһе прокурор булырға теләй.

Был гимназияла 1-се синыфтан белем алдым һәм күп кенә синыфташтар менән беҙ ун бер йыл бергәбеҙ. Бында юғары квалификациялы уҡытыусылар эшләй һәм балаларға төплө белем бирелә, дәрестәрҙән буш ваҡыттарҙы ла файҙалы итеп уҙғарыу өсөн бөтә шарттар тыуҙырыла. Буласаҡ сығарылыш уҡыусылары өсөн физика-математика, социаль-гуманитар һәм химия-биология йүнәлештәре бар. Белем биреү бик сифатлы, киләсәктә имтихандар тапшырыу һәм теләгән йүнәлештә уҡырға инеү, һөнәр үҙләштереү йәһәтенән отошло.

Гимназияла өҫтәмә белем биреүгә иғтибар ҙур, тигәйнем инде, мин үҙем баскетбол һәм тхэквондо түңәрәктәренә йөрөнөм. Тхэквондо буйынса спорт мастерына кандидат булдым. Спорт уҡыуҙан ял итеүҙең бик ҡулай ысулы, мәктәптә саҡта баш эшләй, ә тренировкалар мәлендә - мускулдар. Ваҡытты дөрөҫ бүлгәндә һәм теләгең булғанда барыһына ла өлгөрөүе ҡыйын түгел, бөтә яҡлап та өлгәштәрем булыуы, киреһенсә, алға этәргес көс ул. Быға Мостай Кәрим исемендәге грант лауреаты булыуым да дәлил. Был юғары исемгә мин 2019 йылда мәктәп предметтары буйынса төрлө олимпиадаларҙа яулаған еңеүҙәрем, спорттағы өлгәштәрем һәм мәктәп тормошонда әүҙем ҡатнашыуым өсөн лайыҡ булдым. Минең тырышлығым, маҡсатлы булыуым ғаиләләге тәрбиәнән килә, атай-әсәйем миңә ҡарата бик юғары өмөттәр бағлай һәм уларҙы һынатҡым килмәй. Ҡайһы саҡта ялҡып та китәм, әммә оҙаҡ ял итеп, бушты бушҡа ауҙарып ята алмайым. Шуға телефон, компьютер һәм башҡа гаджеттарҙа сүп-сар мәғлүмәт ҡарап, ваҡыт уҙғарған тиҫтерҙәремде аңлауы ауыр. Киләсәген уйлаған, үҙаллы булырға теләгән һәм алдына маҡсат ҡуйған кеше уҡыу йәки эш һәм ял минуттарын дөрөҫ бүлә белергә тейеш. "Һуңғы ҡыңғырау"ҙан һуң бының һөҙөмтәһе күренәсәк.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# "ҠУЛ ЙЫЛЫҺЫ" БИҘӘЙӘСӘК



**Башҡортостандың баш ҡалаһында "Үҙәк баҙар" юл саты ҡулсаһындағы иң яҡшы арт-объект концепцияһына конкурс тамамланды. Конкурсҡа барлығы 38 проект тапшырылған булған.**

Барлыҡ эштәрҙе ҡарағандан һуң, баһалама ағзалары "Ҡул йылыһы" һәм "Евразия майҙаны" тип аталған эштәргә өҫтөнлөк бирә. Мәскәү ҡалаһынан "Ҡала үҫеше институты" коммерцияға ҡарамаған автоном ойошма вәкиле Илья Ищенконың "Ҡул йылыһы" проекты абсолют еңеүсе тип табыла.

Архитектура объекты нигеҙендә милли берҙәйлек принцибы ята. Ике ҡул символы Европа менән Азияның осрашыуын сағылдыра. Объект архитектураһы традицион башҡорт биҙәктәренә нигеҙләнә. Киңлектәге ромб фигураһын тәшкил иткән стела берҙәмлек, ғаилә һәм дуҫлыҡты символлаштыра. Ҙур булмаған элементтар бергә йыйылып, шәхсиҙән бөтөнгә күсеүҙе аңлата һәм Башҡортостан Республикаһының кешеләрҙе бер бөтөнгә берләштергән күп динле, күп мәҙәниәтле республика булыуын күрһәтә.

Билдәле ваҡыт арауығында милли музыка ҡоралдарында башҡарылған милли көйҙәр яңғырауы объектҡа үҙенсәлек өҫтәй.

12+

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# СӘМГӘ ТЕЙҘЕ ТЕГЕЛӘР

**Украина биләмәһендә Рәсәй Армияһының махсус хәрби операцияһы башланыу менән Америка Ҡушма Штаттары һәм уларҙың Көнбайыштағы, Алыҫ Көнсығыштағы сәүектәре ярыша-ярыша беҙҙең илгә санкциялар индерҙе.**

Илебеҙҙең ауыл хужалығына орлоҡ индермәүҙе үҙҙәренсә Рәсәй иктисадын емереүгә илтеү һәм ҙур батырлыҡ итеп күрһәтергә маташтылар. Ауыл ерендә йәшәгәс, бының дөрөҫ фекер түгел икәне миңә яҡшы таныш. Мәҫәлән, бер ун-ун биш йыл элек Нидерландтан килтерелгән, беҙҙең илдә "Голланд картуфы" тип исемләнгән үҫенте орлоғо модаға инеп киткәйне. Дөрөҫ, беҙ ҙә модаға эйәреп сәстек уны. Ҡарап тороуға матур күренгән картуфты ҡаҙып алып бешергәс, өмөтөбөҙ аҡланмауға үкендек. Төҫкә матур булһа ла, тәме юҡ, әлдә үҙебеҙҙең "икенсе икмәк" орлоғон бер аҙ сәскәйнек. Шуға ла икенсе йылына сит ил ҡунағы менән хушлашырға тура килде. Шул ваҡиғанан һуң йәшелсәнең дә үҙ ерлегебеҙҙә етештерелгән орлоғон ғына ҡулланабыҙ. Еләк-емеште үҙебеҙ өсөн үҙебеҙҙә үҫтерербеҙ ҙә ул, тик ил Президенты ҡарарына ҡаршы булған сәхнә йондоҙҙары ҡара ыуылдырыҡһыҙ ни эшләр икән, тип "ҡайғырам", уны сит илгә сығарыу ҙа тыйылды бит...

Күптән түгел ҡалаға барғанда элекке танышымды осраттым. Хәл-әхүәл һорашҡас, "Ауылығыҙҙа картуф сәсергә бер биш сутый ер табылмаҫмы?" тип һораны. Ысынлап та, быйыл буржуйҙар күптәрҙе баҡсаға кире ҡайтырға мәжбүр итә. Дөрөҫ, һатыуҙа еләк-йәшелсә тулып ята. Египет картуфы, Ҡытай редисы, Төркиә томаты, аҡсаң ғына булһын, тик... Кем уларҙы бер тапҡыр булһа ла һатып алып ашап ҡарай, үҙебеҙҙең ерлектә үҫкәндең тәменә етмәүен билдәләй.

Шундай ваҡиға иҫкә төшә. 1995 йылдың 1-2 июнендә Өфөлә I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы уҙҙы. Уның алдынан алыҫ туғандарыбыҙ булған мадьярҙар килеп, республика биләмәһенән 30 бейә һатып ала, ҡымыҙ яһарға өйрәнә. Ылауҙар менән атайолатайҙары юлынан ҡайтып, был тылсымлы эсемлекте етештерә. Эсеп ҡарағас, тәме ҡымыҙға оҡшамағанын аңлайҙар. Аптырап, Башҡортостанға шылтыраталар: "Беҙ бейә һөтөн һеҙ өйрәткәнсе beштек, тик ҡымыҙыбыҙ тәме бөтөнләй икенсе булып сыҡты",- тиҙәр. Өфөләрҙең яуабы ҡыҫҡа була: "Һеҙ беҙҙең ҡылғанды ла алып китергә онотҡоғоҙ бит!"

Ошо миҫалдан ғына сығып фекер йөрөткәндә лә, магазин кәштәләрендә тулып ятҡан еләк-емеш тыштан нисек кенә матур күренмәһен, үҙебеҙҙә үҫкәнгә етмәүен аңлайһың. Икенсенән, сит тарафтарҙа һатыу өсөн үҫтерелгән йәшелсә-емешкә ниндәй дозала ашлама һибеләгәндер - аңлауы ҡыйын түгел. Өсөнсөнән, ул йәшелсә-емеш йыйып алынғас, юлда күпме ваҡыт уҙа бит әле - бынһы ла шикләнергә сәбәп булырлыҡ. Һәм башҡалар, һәм башҡалар.

Илебеҙгә ҡаршы индерелгән был санкцияларҙың ыңғай яғын быйыл баҡса үҫтереүселәрҙең күпләп артыуында күрәм. Эшкәртелмәй ятҡан ер майҙаны ҡырҡа кәмейәсәк, файҙалы эш менән булышҡандар ҙа бермә-бер артасаҡ. Мин үҙем бер ун йыл элек айыу баланы (жимолость) ҡыуаҡтары ултырткайным. Уның емешенән етештерелгән ҡайнатмала витаминдар ҡарағатҡа, ҡурай еләгенә һ.б. ҡарағанда күпкә артыҡ. Һуңғы йылдарҙа был емеште, шулай уҡ йәмшегән, сейә ағасын ултыртыусылар бермә-бер артты. Беҙ ҙә башҡаларҙан күреп, баҡсабыҙға еләкте күпләп ултырттыҡ. Көҙгә уның майҙанын арттырыу планыбыҙ ҙа бар. Әйткәндәй, ауыл ерендә йәшәгәндәр хәҙер был еләкте баҡса тултырып үҫтерә, емеше өлгөргәс, ҡалаҡыҡлар үҙҙәре килеп һатып ала. Ҡайһы берәүҙәр хатта уны донъя көтөү бизнесына әйләндергән. Шуға күрә ауыл ерендә эш юҡ, тиеүҙәренә ышанмайым мин. Бының өсөн, кем әйтмешләй, елкә генә кәрәк. Һәм, иң мөһиме, Көнбайыш агрессорҙарының старт өсөн быйылғылай беҙҙең сәмгә тейеп, "артҡа тибеүе" лә етә.

**Сәйфулла ӘМИРОВ,**
**Көйөргәҙе районы.**

КӨНАУАЗ

# КИЛӘСӘК МӘКТӘБЕ ТЫУЫП КИЛӘ...



**Пионериябыҙ ҙа үҙебеҙ менән ҡуша ҡартайҙы - ошо көндәрҙә уның ойошторолоуына бер быуат тулып үтте... Әммә ул үҙенең сафында тәрбиәләнеп үҫкән бер нисә быуын күңелендә һаман да балаларса сафлығын, инсафлығын, осҡонон, илһөйәрлеген, намыҫын һәм выжданын һаҡлап ҡала килә, шуныһына шөкөр.**

Дөрөҫ, бар арабыҙҙа элекке пионер хәрәкәтенә кәмһетеп, көлөп, уның йөҙөндә Павлик Морозов образын карикатура итеп файҙаланыусылар ҙа. Ләкин нишләптер илебеҙҙе фашист баҫҡынсыларынан һаҡлап, кескәй ғүмерҙәрен аямаған ҙур йөрәкле Советтар Союзы Геройҙары Марат Казей, Зина Портнова, Леня Голиков, Шура Чекалин, Боря Цариковтың, шулай уҡ тиңһеҙ батырлыҡтары өсөн орден-миҙалдарға лайыҡ булған бик күп пионерҙарҙың исемдәрен берәүҙең дә телгә алғаны юҡ. Хәйер, илебеҙ тарихына алтын хәрефтәр менән уйылған был балаларҙың исем-шәрифтәре күптәргә таныш та түгелдер, бугай...

Әшулай ҙа барыбер совет йәмғиәтенең төп тәрбиә мәктәбе булған ошо пионерҙар хәрәкәтен алыштырырҙай башҡа бер ниндәй ҙә балалар ойошмаһының тарихта булғаны юҡ әле. Тырышып, яҡшы уҡыу, тәртипле, әҙәпле, намыҫлы, ярҙамсыл булыу, йәмғиәтебеҙҙең лайыҡлы алмашсылары - ул һәм ҡыҙҙары -

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## "Һуңғы ҡыңғырау" сараһы йәштәрҙе уҙаллы тормошҡа ғына түгел, яңы маҡсаттар алдына ла баҫтыра түгелме?

***Гөлназ Әхмәтйәнова, Өфө ҡалаһының Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһы уҡыусыһы:*** Һуңғы ҡыңғырау көнө етеп килеүен аңлағас, башҡа бик күп уйҙар килде. Бигерәк тә гимназияны тамамлағандан һуң тормошобоҙ нисек үҙгәрер икән, ҡайҙа уҡырға инербеҙ, ниндәй белем алырбыҙ, синыфташтар менән бәйләнештәр һаҡланырмы, тигәнерәк һорауҙар борсой. Һуңғы ваҡытта синыфташтар менән бөтә мәктәп йылдарын, күңелле һәм мәҙәк осраҡтарҙы, әхирәттәр менән дуҫлығыбыҙҙы хәтергә төшөрөп, йыш ҡына һөйләшеп ултырабыҙ. Шунан 7-8-се кластар тирәһендә күп бирелгән өйгә эштәрҙән ялҡып, гимназияны тиҙерәк тамамлап, уҡыуға бер дәфтәр тотоп ҡына йөрөргә теләгән саҡтарыбыҙҙы иҫләп, көлөшөп алабыҙ. Хәҙер гимназиянан китке, бала саҡтан сыҡҡы килмәй кеүек.

Шулай ҙа, мин "өлкәндәр тормошона" ныҡлы әҙерләндем, тиергә була. Гимназияны тамамлау - үҙаллы булыу, тигән менән бер минең өсөн. Беҙҙе хәстәрләп торған уҡытыусылар ҙа, ата-әсәләр ҙә гел эргәлә булмаясаҡ. Ҡаршылыҡтарҙы үҙем үтергә, көслө кеше булырға, киләсәгемде үҙ ҡулыма алып йәшәргә теләйем. Был маҡсатҡа тәүге аҙымым гимназияны уңышлы тамамлап, теләгән юғары уҡыу йортона уҡырға инеү. Әле ҡыҙыл аттестат алырға бар тырышлығымды һалам, уның һөҙөмтәһе Берҙәм дәүләт имтихандарын тапшырғас билдәле буласаҡ. Унан инде Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетына уҡырға инеп, журналист һөнәрен үҙләштерергә теләйем. Синыфташтарым да телсе, юрист кеүек һөнәрҙәргә өҫтөнлөк бирә. Әйткәндәй, быйыл беҙҙең Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында 41 сығарылыш уҡыусыһы. Маҡсаттарыбыҙ әле бер - имтихандарҙы яҡшы тапшырып, теләгән юғары уҡыу йорттарына уҡырға инергә.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Яңы коронавирус инфекцияһына ҡаршы көрәш буйынса оперштаб ауырыу йәйелеүгә тоттороуға бәйле мәғлүмәттәрҙе яңыртты. Статистикаға ярашлы, пандемия башланғандан алып 287 586 сир осрағы теркәлгән. Һуңғы тәүлектә уларҙың һаны 74-кә артҡан. Коронавирус диагнозы раҫланған 62 кеше дауаханаға урынлаштырылған. Бөтәһе 281 231 кеше һауығып сыҡҡан, 59-ы - һуңғы тәүлектә. Ике үлем осрағы теркәлгән. Республикала вакцинация тулыһынса тамамланды һәм әле ҡабаттан прививка эшләтеү башланды.

✔Башҡортостанда халыҡты ковидтан ревакцинациялау әүҙем бара. Үҙған аҙнала ғына 21 мендән ашыу кеше яңы коронавирус инфекцияһынан ҡабаттан прививка яһатҡан, тип белдерҙе һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Азат Рәхмәтуллин. Республикала бөтәһе 478 298 кеше ревакцинация яһатҡан. Коронавирустың яңы тулҡыны башланыу ихтималлығына бәйле, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров планды теүәл үтәргә һәм өс ай эсендә халыҡҡа ревакцинация яһауҙы тамамларға ҡушты.

✔Гамалея исемендәге эпидемиология һәм микробиология фәнни-тикшеренеү үҙәгенең 6-11 йәшлек балалар өсөн яңы коронавирус инфекцияһына ҡаршы вакцинаһын клиник тикшереү 3 июндә башлана. Был хаҡта үҙәктең директоры Александр Гинцбург хәбәр итте. Бынан алда Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ковидтан "Спутник М" вакцинаһын теркәгәйне. Прививканы 12-18 йәшлек үҫмерҙәргә эшләйҙәр. Башҡортостанда ата-әсәләрҙең һәм опекундарҙың рөхсәте менән дүрт меңгә яҡын бала ошо вакцинаны ҡаҙатҡан.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2019 йылдың 11 июнендәге "Башҡортостан Республикаһында ауыл ерендә эшләгән йәш уҡытыусыларға гранттар тураһында" указға үҙгәрештәр индерҙе. Указдың яңы редакцияһына ярашлы, 2022 йылда йәш уҡытыусыларға 690-шар мең һумлыҡ 25 грант тапшырыла. Был конкурста ауыл ерендәге мәктәптә эшләгән 35 йәшкә тиклемге уҡытыусылар ҡатнашырға мөмкин. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда ауылда эшләгән йәш уҡытыусылар өсөн гранттар 2019 йылдың июлендә булдырылғайны.

*✓ Һәләк булған геройҙарҙы ғына тәбрикләүҙәре ғәҙел түгел. Хәрби хәрәкәттәрҙең тере ҡатнашыусыларына ла уларҙың тиңһеҙ ҡаһарманлығы ватандаштары өсөн мөһим булыуы һәм тейешенсә баһаланыуын белеү һәм аңлау мөһим.*

илһөйәрҙәр булып үҫеүҙе маҡсат итеп ҡуйған был ойошма заманында иҫәпһеҙ күп хеҙмәт батырҙары, Бөйөк Ватан һуғышы Геройҙары ғына түгел, ә миллионлаған ябай һәм ысын кешеләр быуындарын тәрбиәләне. Дөрөҫ, заманына күрә был ойошманың да үткән быуат офоғона яҡынайған һайын, ысынбарлыҡтан алыҫлаша барыуы, уның утопик идеалдары - коммунистик йәмғиәткә, совет осоро йылдарында ил менән идара итеүсе диктатор власть - коммунистар партияһы эшенә табындырырға маташыуҙары кеүек режим нисәмә быуын балаларҙың киләсәккә өмөттәрен буш ҡыуыҡ шикелле шартлатты, рәхимһеҙ алдыҡҡа әйләнде. Бәлки, әлеге кескәйҙәр ойошмаһының тәрбиәүи эшен ваҡытында коммунистик идеологиянан, сәйәсиләштереүҙән азат итеп, пионерияны ысынбарлыҡ юлына төшөрөргә, йүнәлешен дөрөҫләп ебәрергә генә кәрәк булғандыр? Был хәрәкәт, ниһайәт, юҡҡа сығып, балалар үҙ мәйеленә ҡуйылған йылдарҙың ҡиммәткә төшөүе бөгөн асыҡ һиҙемләнә түгелме, юғиһә?

Бөгөн һәм айырыуса илдәге һуңғы сәйәси хәлдәр торошо йәмғиәттә патриотик тәрбиә, хеҙмәткә ҡарата һөйөү, йәш быуындың әхлаҡлылыҡ сифаттары хаҡында һүҙҙең яңырыуына, ошо юҫыҡта яңы маҡсаттар билдәләнеүгә алып килде. Эйе, һуң булһа ла, уң булһын, тигәндәй, хатаны төҙәтергә бер ҡасан да һуң түгелдер. Ысын һәм ҡиммәтле ерлеккә нигеҙләнгән ана шундай яңы идеяларҙың береһе - Башҡортостан мәктәптәре уҡыусыларын "шайморатовсылар" сафына бағышлау. "Шайморатовсы" булыу бик мәртәбәле, - тигәйне республикабыҙ Башлығы Радий Хәбиров Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыларын "шайморатовсылар" сафына алған тантанала ҡатнашҡанда.- "Шайморатовсы" символы булған форма кейеү хоҡуғы алғас, һеҙгә легендар комдив иҫтәлегенә лайыҡлы, республиканың һәм илдең ысын патриоты булыу яуаплылығы йөкмәтелә. "Салауат тоҡомдары сигенә белмәй!" тигән беҙҙең девизға тоғро булып, уны аныҡ эштәрегеҙ менән раҫлағыҙ".

Яҡшы башланғыс, һүҙ ҙә юҡ. Элекке пионерия хәрәкәте урынына, ниһайәт, ысынбарлыҡҡа, ҡаһарманлыҡ миҫалына нигеҙләнгән, Тыуған ил өсөн ғорурлыҡ, илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләүсе, балалар күңеленә юғары рухи-әхлаҡи ҡиммәттәр һеңдереүсе өр-яңы тәрбиә мәктәбенә нигеҙ һалына беҙҙә, бик мәслихәт! Әйткәндәй, "шайморатовсылар класы" стандарттарының талаптары юғары, уға лайыҡ булыу өсөн балаларға тырышырға тура киләсәк. "Берәү - бөтәһе, бөтәһе - берәү өсөн" тигәндәй: иң беренсе - уҡыу, кластан тыш эш, илһөйәрлек тойғоһо, физик әҙерлек кәрәк. Ошонда уҡ, әлбиттә, хеҙмәткә һөйөү тәрбиәһе лә һалынасаҡтыр, сөнки бөгөн ил күләмендә тап ошо хаҡта ла һүҙ бара: эшләп ашарға, үҙебеҙ өсөн үҙебеҙ етештерергә! Рәсәй Дәүләт Думаһы спикеры В.Володин әйтеүенсә, юғиһә, парламентҡа ата-әсәләрҙән һәм уҡытыусыларҙан балаларҙы хеҙмәткә йәлеп итеү, эшләргә өйрәтеү зарурлығы хаҡында мөрәжәғәттәр күп килә икән.

Әгәр ошо урында кемдер хеҙмәт тәрбиәһе эшен мәктәптәрҙә дежурлыҡ итеү тәртибен ҡайтарыуҙан башларға тәҡдим итә икән, был бер ҙә ваҡ мәсьәлә түгелдер. Мәҫәлән, Рәсәй төбәгенең береһендәге "Киләсәк мәктәбе" директорының был мәсьәләгә ҡарашы иғтибарға лайыҡ. Күп кенә алдынғы мәктәптәрҙә был тәртип - дежурлыҡ итеү - һаҡланып ҡалды һәм беҙҙә лә, ти ул. Дөрөҫ, мәктәп директорын ваҡытында уҡыусыларҙан уларҙың үҙҙәренең эш урындарын таҙа тотоу һәм йыйыштырыуҙы талап иткән өсөн ҡайһы бер ата-әсәләр ялыуы буйынса хатта прокуратураға саҡыртып та йонсоталар. Уҡыусыларҙы класс бүлмәләрен йыйыштырыуға ҡушыу - ул бала хеҙмәтен файҙаланыу, тигән ғәйеп ташлана етәксегә. Ә бит ошондай ҡараш һөҙөмтәһендә ҡыл да ҡыбырлатырға иренгән йәштәрҙең ялҡаулығы тап ошо үҙҙәре ултырған партанан, класс һәм торлаҡ бүлмәләренән башлана ла инде. Шулай түгелме ни?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? "Һуңғы ҡыңғырау" сараһы йәштәрҙе уҙаллы тормошҡа ғына түгел, яңы маҡсаттар алдына ла баҫтыра түгелме?

***Ильяс Мостафин, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы:*** Эйе, нәк шулай, "Һуңғы ҡыңғырау" беҙҙе киләсәгебеҙ тураһында уйландыра. Кемгәлер уҙаллылыҡ та бирәлер. Ә беҙ, беренселәр, күптән уҙаллы, маҡсатлы уҡыусыларҙыр ул. Шулай ҙа хәҙер һәр кемебеҙҙең күңеленә иткән һөнәрҙе үҙләштерергә, теләгән эше менән шөғөлләнергә мөмкинлеге буласаҡ. Ғүмерҙең яңы бер этабына күсәбеҙ, тиергә кәрәк.

Гимназия-интернатта мин 7-се синыфтан алып физика-математика профиле буйынса уҡыйым, үҙем Әбйәлил районынанмын. Бында барлыҡ эштәрҙе лә синыфташтар, дуҫ-иштәр менән бергәләп башҡарырға өйрәнгәнбеҙ, хәҙер төрлөбеҙ төрлө яҡҡа таралышһаҡ, шул берҙәмлегебеҙ һағындырыр инде. Һәр көнөбөҙ бергә, бер маҡсатта - яҡшы уҡырға, төрлө яҡлап үҫешергә, әүҙем булырға тип үтә ине бит. Мин тик яҡшы билдәләргә генә өлгәшергә, алған белемдәремде төрлө кимәлдәге олимпиадаларҙа һынап ҡарарға тырыштым. Бынан тыш, спортта ла уңыштарым бар, 9-сы синыфтан алып еңел атлетика менән етди шөғөлләнәм. Минең кеүек 147 йәш кеше тамамлай быйыл гимназия-интернатты һәм арабыҙҙан төрлө өлкәлә яҡшы белгестәр үҫеп сығырына ҙур өмөттәр менән "Һуңғы ҡыңғырау", сығарылыш кисәһен көтөп ҡалабыҙ. Әлегә төп маҡсатым - һайлаған программалаусы һөнәрен үҙләштереү һәм быға иткән һынауҙарҙы еңеп сығыу.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

*БАТЫРЛЫҠ МӘКТӘБЕ*

# ЯРТЫ БЫУАТТАН ҺУҢ...

## тағы баш ҡалҡытты был яуыҙлыҡ

**Минең яратҡан ҡустым бар - Денис Камалетдинов. Уны дүрт айлыҡ сағынан беләм һәм шунан алып яратам. Бала сағыбыҙ бергә үтте. Ҡустыларым араһынан унан да яҡынырағы юҡ. Мәктәпте тамамлағандан һуң ул, мине аптыратып, Коломенск юғары артиллерия команда училищеһына уҡырға инде. Хәрби булырға мин хыяллана инем, әммә ҡустым хәрби булды, мин гражданкала ҡалдым. Хәрби хеҙмәтенең башынан уҡ үҙен рейтинглы курсант итеп күрһәтте. Ғәскәрҙәргә эләккәс, шунда уҡ профессионаллеге, һалҡын ҡанлылығы һәм үҙенсәлекле юмор хисе өсөн командирҙарының ихтирамын ҡаҙанды.**

**...** 16 мартта, Украиналағы хәрби операция мәлендә ул танкыға ҡаршы минаға эләгеп шартлай: пулянан, ярсыҡтарҙан яралана, быуындары ҡаймыға, һөйәктәре бер нисә урындан һына һәм ауыр контузия ала. Шуға ҡарамаҫтан, 14 көн дауамында артиллерия дивизионы һәм 86 яугирҙан торған личный состав менән оҫта командалыҡ итә, хәрби бурысты үтәй һәм барлыҡ һалдаттарын да иҫән-һау алып сыға.

"Ҡайҙа бында юмор хисе?" тип һорар бәғзеләр. Ә ул ут аҫтынан сыҡҡас, беренсе шылтыратҡанында уҡ: "Мин ҡайттым. Ауыр яралы, әммә тере. Бәлки, орденға тәҡдим итерҙәр. Ә мин, атайымдың ауылын Ҡотойҙан Камалетдин тип үҙгәртеүҙәренә һәм тере саҡта уҡ тыуған Учалы ҡалаһында фамилиямды Хәрби дан аллеяһына яҙыуҙарына ла ҡаршы булмаҫ инем", - тип шаяртты.

Миненсә, ябай тормоштағы граждан ҡарашынса, һәләк булған геройҙарҙы ғына тәбрикләүҙәре ғәҙел түгел. Хәрби хәрәкәттәрҙең тере ҡатнашыусыларына ла уларҙың тиңһеҙ ҡаһарманлығы ватандаштары өсөн мөһим булыуы һәм тейешенсә баһаланыуын белеү һәм аңлау мөһим.

Һуңынан шылтыратып һөйләшкәндә ҡустым һүҙҙәрен ентекле һайлап ҡына, ҡыҫҡа ғына, махсус операцияла үҙенең ҡатнашыуының үҙенсәлектәренә ентекле туҡтамай ғына һәм ниндәй ҡаҙанышы өсөн орденға тәҡдим итеүҙәрен һөйләне: "Икенсе дәрәжә Ватан алдындағы ҡаҙаныштар өсөн ордены. Ҡылыс һүрәттәре төшөрөлгән. Награда, тигәндәй. Беләһеңме, минең өсөн иң ҙур бүләк - ул минең яугирҙарымдың ата-әсәләренең, кәләштәренең, хәрби заданиеһы бергә үтәгән һәм 1 апрелдә ҡамауҙан бер юғалтыуһыҙ алып сыҡҡан ир-егеттәрҙең шылтыратыуҙары. Көн аша минә һалдаттарымдың яҡындары шылтырата һәм күҙ йәштәре тоҙо һеңгән ирендәре менән улдарын, ирҙәрен, егеттәрен ҡотҡарған өсөн, сабыйҙар хаҡына аталарының ғүмерен һаҡлап ҡалған өсөн рәхмәт белдерә. Рәхмәт - ул, ағай, теләһә ниндәй дәүләт наградаһынан да юғарыраҡ..."

**...** Денис өсөн махсус операция 24 февралдә башлана. Командование улар алдына бик ҡатмарлы бурыс ҡуя: дошман тылына тәрәнгә үтеп инергә (фронт һыҙығынан 200 километрға эскә) һәм һиҙҙермәй генә дошман сәптәрен юҡ итергә. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: артиллерия дивизионы Баш разведка идаралығы (ГРУ) спецназының разведка дозоры түгел. Разведка дозоры егеттәре шығырлап торған тәрән ҡар ҡатламынан да шым ғына һаҡсы эргәһенә үтеп, уның хәрби комплектының барлыҡ патрондарын иҫәпләй ала. Ә артиллерия дивизионы - йөҙҙәрсә тонна ғөрһөлдәп һәм шығырлап торған ҡорос. Күҙ алдына килтерегеҙ: ошо ажғырып торған "йыртҡыс" һиҙҙермәй (!) генә дошман тылына үтеп инергә һәм ай ярым хәрби бурыс үтәп, кире ҡайтырға тейеш!

**(Дауамы 6-сы биттә).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин республика Хөкүмәте кәңәшмәһендә балалар һауыҡтырыу лагерҙарының эшмәкәрлегендә яңы санитар-эпидемиологик хәүефһеҙлек талаптары хаҡында һөйләне. 2022 йылдың 21 мартында COVID-19 буйынса санитар-эпидемиологик ҡағиҙәләрҙең үҙгәреүенә бәйле, ҡала ситендәге лагерҙарҙы 100 процентҡа тултырырға мөмкин (былтыр 75 процент ине). Хәҙер ойошмаларҙа балалар һәм йәштәр өсөн асыҡ һауала саралар үткәрергә рөхсәт ителә. Ҡала ситендә урынлашҡан лагерҙарҙың хеҙмәткәрҙәре смена башланыуҙан ике көн алдан ковидка ПЦР-тест тапшырырға тейеш. Тикшереү республика ҡаҙнаһы иҫәбенә буласаҡ.

✓Башҡортостанда Һуңғы ҡыңғырау байрамына арналған сараларҙы уҙғарғанда алкоголь продукцияһын ваҡлап һатыу тыйыла. Быйыл Һуңғы ҡыңғырау туғыҙынсы кластарға - 18 майҙа, ә ун беренселәргә 25 майҙа яңғырай. "Башҡортостан Республикаһының 2007 йылдың 1 мартындағы 414-се законының 6.2 статьяһына ярашлы, магазиндарҙа хәмер һатыу тыйыла. Был дөйөм туҡланыу предприятиеларына ҡағылмай", - тип белдерҙеләр Башҡортостан Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығында.

✓Башҡортостан аграрийҙары бөтә райондарҙа ла яҙғы культуралар сәсеү эштәрен әүҙем алып бара. Урал алды дала һәм Көньяҡ урман-дала зонаһы хужалыҡтары был аҙнала иртә культуралар сәсеүҙе тамамлай. Төньяҡ райондарҙа сәсеү эштәре һәм йылы яратыусан үҫемлектәр (кукуруз, ҡарабойҙай, тары, соя) сәсеү йылдам темптар менән бара. Был турала Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, төп ауыл хужалығы культураларын май аҙағынаса, йылы яратыусан үҫемлектәрҙе 12 июнгәсә сәсеп бөтөрөү күҙаллана.

✓Башҡортостанда 2021 йыл менән сағыштырғанда талпандан зыян күреүселәр кәмегән. Роспотребнадзорҙың республика идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, 11 майға 765 кешегә талпан ҡаҙалған. Былтыр иһә күберәк - 833. Уларҙың 294-е - балалар. Йыл башынан 20 меңләгән кешегә талпан энцефалитынан прививка яһалған.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ӨМӨТ МЕНӘН ЙӘШӘЙЕК

**Өфө ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмә кадрҙар алмашыныуы тураһындағы мәғлүмәт менән хәтерҙә ҡалыр, моғайын, сөнки бер юлы ул тиклем үҙгәреш булғаны юҡ ине, шикелле.**

Баш ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев йыйылыусыларҙы Калинин районының яңы хакимиәт башлығы Михаил Замурагин менән генә таныштырып ҡалманы, йәмәғәтселек һәм киң мәғлүмәт саралары менән бәйләнеш буйынса вице-мэр итеп Денис Ғәниевтың тәғәйенләнеүен белдерҙе. Денис Таһир улы күптәргә радио һәм телевидение тапшырыуҙарын алып барыусы булараҡ та таныш. Шуға күрә быға тиклем баш ҡаланың матбуғат сараларына тейешенсә бирелмәгән иғтибарҙы, бәлки, тиҙҙән тоя башларбыҙ. Һәр хәлдә, яҡшыға өмөтләнәйек. Шулай уҡ сираттағы үҙгәреш мәғариф өлкәһенә ҡағыла: бығаа тиклем Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Мәғариф идаралығын етәкләгән Елена Хаффазова Киров районы хакимиәте башлығы урынбаҫары вазифаһына күсә, ә уның урынына полилингваль мәктәп директоры булып эшләгән, һуңғы ваҡытта Мәғариф министрлығының Милли мәғариф идаралығын етәкләгән Азат Батыршин килә. Кадрҙар алмашыныуы Граждандар йәмғиәте институттары менән хеҙмәттәшлек буйынса идаралыҡҡа ла ҡағылды. Унығ етәксеһе итеп быға тиклем урынбаҫар булып эшләгән Тимур Мостаев тәғәйенләнде.

Кәңәшмәнең төп мәсьәләләренең береһе Пугачев урамын реконструкциялауҙы башлау тураһындағы мәғлүмәт булды. Уның маҡсаты - урамды хәрәкәтте көйләүсе дөйөм ҡала әһәмиәтендәге магистраль урам параметрҙары нормативтарына еткереү, таҙартыу ҡоролмалары булған ирегән ҡар һәм ямғыр һыуҙары ағыу канализацияһын, инженер коммуникацияларын үҙгәртеп ҡороу, юлды дүрт һыҙатлы итеп киңәйтеү, яҡтылыҡ сығанаҡтарын модернизациялау. Реконструкция эштәре ике этапта тормошҡа ашырыласаҡ. Ремонт эштәре ваҡытын ҡыҫҡартыу маҡсатында икенсе этапта Геофизиктар урамынан Бородино урамына тиклемге араусыҡ тулыһынса ябыласаҡ. Транспорт хәрәкәтенә июлдең беренсе ун көнлөгөндә сикләү индереләсәк. Участкылы япҡанға тиклем оҙонлоғо 3,2 километр булған урау юл һалынасаҡ. Реконструкция эштәре 2024 йылда тамамланырға тейеш.

Көн тәртибендә юлдарға билдәләр һалыу, парктарҙа, скверҙарҙа һәм йәмәғәт урындарында төҙөкләндереү мәсьәләләренә лә етди иғтибар бирелде. Шулай уҡ дөйөм белем биреү мәктәптәрендә Берҙәм дәүләт имтихандарын тапшырыу ҙа күҙ уңынан ысҡындырылманы. Быйыл баш ҡалала 5 меңдән ашыу кеше БДИ тапшыра, уларҙың 4853-ө быйылғы сығарылыш уҡыусылары булһа, 541-е - уҙған йылдарҙа мәктәпте тамамлаусылар. Имтихандар осоронда ҡалала БДИ тапшырыу буйынса йыһазландырылған 25 пункт эшләйәсәк. Имтихан тапшырыу фәндәре гәҙәттәгесә ҡала: күптәр математиканы һайлай. Икенсе-өсөнсө урында информатика менән физика тора. Быйыл БДИ-ның форматы һәм эштәрҙе башҡарыу ваҡыты үҙгәргән, анығыраҡ әйткәндә, уҡыусылар 30 секунд эсендә яуап биргән һорауҙар алынған; эштәрҙә дөрөҫ яуаптар күләме күрһәтелмәй; ҡайһы бер һорауҙар беренсе өлөштән икенсеһенә - анығыраҡ яуап талап иткән өлөшкә күсерелгән; БДИ тапшырыу ваҡыты ҡыҫҡартылған, мәсәлән, йәмғиәтте өйрәнеү һәм тарихта ул хәҙер 55 минутҡа әҙерәк, ә ҡайһы бер фәндәрҙән, киреһенсә, оҙағыраҡ ваҡыт әҙерләнергә мөмкин буласаҡ. Яңы форматта бер һорау бер нисә өҫтәмә һорауҙан тороуы ихтимал һәм уларҙың һәр береһенә яуап бирергә кәрәк. Ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева белдереүенсә, уҡыу йылы башланғандан алып имтихандарға әҙерлек системалы рәүештә алып барыла, мәктәптәрҙең ошо йүнәлештәге эшмәкәрлеге һәр саҡ иғтибар үҙәгендә һәм контролдә тора.

Бер һүҙ менән әйткәндә, аҙна яңы үҙгәрештәрҙән башланды. Килендә йыл тормай маҡтама, тигәндәй, яңы кадрҙарҙың эш һөҙөмтәһен ваҡыт күрһәтер. Кешене өмөт йәшәтә бит, өмөтләнәйек, көтәйек, сабыр итәйек...

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӘЙҘӘГЕҘ, САУҘА ИТЕРГӘ!



**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың һәм ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиевтың ҡушыуы буйынса Өфөлә баҡсасылыҡ продукттарын һатыу өсөн 32 майҙансыҡта 682 сауҙа урыны булдырылған. Урындар һаны көндән-көн арта бара һәм иң мөһиме - был урындар өсөн хаҡ түләү кәрәкмәй, улар бушлай бирелә. Районлар буйынса мәғлүмәттәр түбәндә:**

**Дим районы -** Хәҡиҡәт урамы, 24а, фермер йәрминкәһе (10 урын); Мусоргский урамы, 19Б (25 урын); "Көньяҡ" ЯСШ, Ухтомский урамы, 19 (64 урын); Хәҡиҡәт урамы, 21-се йорт ҡаршыһы (14 урын).

**Калинин районы -** Инорс биҫтәһе, "Юрматы" ССК-һы (40 урын); "Юлдаш" СК-һы территорияһы, Боровой урамы, 14/3 (100 урын); "Алтын балыҡ" СК-һы Трамвай урамы, 15/1 (20 урын); "Табын" фермер йәрминкәһе, Вострецов урамы, 9-сы йорт эргәһендә (15 урын).

**Киров районы -** Эшсе хәбәрселәр урамы, 20, фермер йәрминкәһе (20 урын); Ғафури урамы, 50 (7 урын); Мөбәрәков урамы, 10/1 (8 урын).

**Ленин районы -** "Тулҡын" парки эргәһе, Әхмәтов урамы (йәрминкә майҙаны) (50 урын); "Заречный" ССК-һы эргәһе, Әхмәтов урамы, 326/1 - урын 50 һум (60 урын); Солтанов урамы буйынса, 2-се йорт эргәһе (12 урын); "Пушкин" ССК-һы (12 урын); Пушкин урамы, 35-се йорт эргәһе (6 урын); Революцион урам, 34 (6 урын); Летчиктар урамы, 3 (6 урын); Красин урамы, 21 (3 урын); Эшселәр урамы, 61 (2 урын).

**Октябрь районы -** Спорт һарайы майҙаны, Р. Зорге урамы, 41 (30 урын); "Йәсмин" СҮ эргәһе Нуғай ҡасабаһы, Совет урамы, 11/2 (20 урын); Рыльский урамы, 17 (10 урын); Йәштәр бульвары, 8/2 йорто эргәһе (15 урын); "Әй" магазины эргәһендә, Энтузиастар урамы, 1Б (10 урын); Октябрь проспекты, 134-се йорт эргәһе (10 урын).

**Орджоникидзе районы -** "Урал" СК-һы, Рәсәй урамы, 23 (15 урын); "Меркурий" СК-һы ("Колхоз баҙары"), Ҡулса урамы, 65 (10 урын); "Тирәктәр" СК-һы ҡаршыһындағы территория, Коммунарҙар урамы, 50 (15 урын); Серго Орджоникидзе исемендәге майҙан (5 урын); Дан бульвары, 18 (4 урын).

**Совет районы -** Менделеев урамы, 177 (41 урын); Әй урамы, 64 (18 урын).

ҠЫҪҠАСА

# КҮПЕРҘӘР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә күперҙәрҙе төҙөкләндереү тураһында яҙып сыҡты.** "Быйыл 13 объект сафҡа инәсәк. Улар араһында - Зинин ауылында юл айырсаһы йәки Өфөлә Ағиҙел йылғаһы аша аркалы иҫке күперҙе капиталь ремонтлау кеүек ҙур инфраструктура проекттары. Халыҡ өсөн әһәмиәтле бәләкәй күперҙәр ҙә бар. 2022 йылға пландар менән уртаҡлашам. Баймаҡ районында - Һаҡмар, Бәләбәйҙә - Өсән, Белоретта - Инйәр һәм Йөйәк, Благоварҙа - Бедринка, Ҡариҙелдә - Байҡы, Шишмәлә - Болошло, Шаранда - Ташшишмә, Саҡмағошта Ҡалмаш йылғалары аша күперҙәрҙе йүнәтәбеҙ. Бөтәһе лә авария хәлендә йәки емерелергә тора, халыҡ уларҙы ныҡ көтә. Шулай уҡ быйыл Талбазы - Красноусол юлында - Ағиҙел йылғаһы һәм М5 "Урал" юлының Оло Теләк участкаһында Эҫем аша күпер кеүек ҙур объекттарға тотондоҡ. Уларҙы 2023-2024 йылдарҙа уҡ сафҡа индерәбеҙ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

✓ **Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы Башҡортостан аграрийҙарының дөйөм суммаһы 9,5 миллиард һумлыҡ льготалы кредитҡа 298 ғаризаһын хупланы.** Был хаҡта Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығында уҙған кәңәшмәлә хәбәр иттеләр. Шулай итеп, республика ауыл хужалығы предприятиеларының льготалы кредитҡа ихтыяжы тулы күләмдә ҡәнәғәтләнделде. Аграрийҙарҙың әүҙем рәүештә яңы техника һатып алыуы һөҙөмтәһендә республикала, ямғыр яуыуға ҡарамаҫтан, сәсеү кампанияһының юғары темпы һаҡлана, Башҡортостанда сәсеү күрһәткесе тәүлегенә 130 мең гектарға тиклем артты. Һөт заводтары һәм һөт эшкәртеү менән шөғөлләнгән бәләкәй предприятиелар ҙа льготалы кредиттан файҙаланыу мөмкинлегенә эйә, булеңгән аҡсаны улар төрөү материалдарын һатып алыуға йүнәлтә ала. Шулай уҡ ит комбинаттары, ит сеймалын эшкәртеүсе предприятиелар ошо маҡсатҡа кредит алырға мөмкин.

✓ **Рәсәй Президенты хәрбиҙәрҙең ғаиләләренә өҫтәмә ярҙам саралары тураһында Указға ҡул ҡуйҙы.** Указға ярашлы, махсус операцияла ҡатнашыусыларҙың балалары уҡырға имтиханһыҙ ҡабул ителә. ЛНР һәм ДНР абитуриенттары сит ил студенттары өсөн квота буйынса уҡырға инергә мөмкин. Рәсәйҙең юғары уҡыу йорттарында ата-әсәһе махсус операцияла ҡатнашҡан абитуриенттар өсөн бакалавриат һәм специалитет программаларына махсус ҡабул итеү квоталары булдырыла. Квота һәр вузға бүленгән дөйөм бюджет урындарынан 10 процент тәшкил итә. Яраланғандарҙың һәм һәләк булғандарҙың балалары юғары уҡыу йорттарына имтиханһыҙ алына. Ижади һәм һөнәри йүнәлеш буйынса һынауҙарҙан тыш, Рәсәй Президентының Указы илдең бөтә вуздарына ҡағыла. Ҡабул итеү кампанияһы 20 июнгә тиклем башлана. Луганск һәм Донецк халыҡ республикаларынан килгән абитуриенттар Рәсәй университеттарына сит ил граждандарын уҡытыу өсөн квота буйынса инергә мөмкин, быйылғы уҡыу йылында ул 5 меңгә күбәрәк - 23 мең урын. 2021-2022 уҡыу йылында Рәсәй университеттарына 576 498 студент ҡабул ителде. 2022-2023 уҡыу йылына - 588 044 урын. Был урындарҙың 73 проценттан ашыуы төбәк вуздарына тура килә.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Дисбактериоз

❖ Беренсе стадия дисбактериоз менән яфаланыусыларға йыл әйләнәһенә ҡара көртмәле ашарға, армыт һуты эсергә (кышҡыға тунҙырып һаҡларға), сөгөлдөр, ҡабаҡ, алма, кәбеҫтә кеүек йәшелсәләрҙе яңыларын ашарға, кишерҙе тик быҡтырылғанын ҡулланырға. Ә ҡыяр һәм помидорҙарҙы ашарҙан алда 60-70 градус эҫелектәге һыуҙа сайырға. Бынан тыш, түбәндәге үләндәрҙән эшләнгән төнәтмәләр файҙалы: ерек ҡуш емеше, йәбешкәк (репешок обыкновенный), һары ҡандала үләне, аҡсәскә, гөлйемеш сәскәһе һәм емеше, цикорий. Айына бер тапҡыр 10 көн дауамында көнөнә 3 тапҡыр 1-әр төймә активлаштырылған күмер ашарға.

### Файҙалы икмәк

❖ Диабет менән сирлеләргә файҙалы икмәк бешереү өсөн 1 әфлисун, ярты каса бал, 1 йомортҡа, 3 ҡалаҡ үҫемлек майы, шәшке ярым йабай он, шул уҡ күләмдә эре тартылған он, 1 ҡалаҡ бешереү өсөн онтаҡ йәки 1/4 балғалаҡ сода, самалап тоҙ, 1 каса мүк еләге, 3/4 каса тары ярмаһы, 2 ҡалаҡ шыттырылған бойҙай оно (мотлаҡ түгел) кәрәк. Мейесте 170 градусҡа тиклем эҫетергә. Икмәк һауыттарын майлап ҡуйырға. 1 ҡалаҡ әфлисун ҡабығына 1/3 каса әфлисун һутын ҡушырға һәм май, йомортҡа, бал ҡушып туҡырға. Икенсе һауытта ике төр онды ла, бешереү өсөн онтаҡ (йәки уның урынына сода) һәм тоҙҙо һалып бутарға. Шунан туҡылған әфлисун әҙерләмәһен өҫтәп болғарға. Ярайһы уҡ ҡуйы ҡамыр килеп сығырға тейеш. Шуға тары, мүк еләге һәм теләк булһа, шыттырылған бойҙай онон ҡушырға. Шунан һауыттарға һалып, 20 минутҡа бешерергә ҡуйырға.

### Ҡауаҡ

❖ Баш ҡауаҡланһа 4 өлөш дегәнәк тамыры, 2 өлөш календула сәскәһе, 3 өлөш ҡомалаҡ тубырсығын алырға. Ҡушымтаның 5 ҡалағына 1 литр һыу ҡойоп 10-15 минут ҡайнатып һөҙөргә. Шуға башты тығып сылатырға һәм 3-4 сәғәткә таҫтамал менән урап ҡуйырға, һуңынан яҡшылап сайырға. Был рәүешле көн аша 7-10 тапҡыр эшләргә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Әсегән һөт, он һәм бойҙай һаҡлау өсөн ҡулланылған ҙур соҡоп эшләнгән һауыттар (көньяҡ-көнсығышта "көбө", көньяҡ-көнбайышта һәм Ағиҙел буйының ҡайһы бер урындарында - "тәпән" тип йөрөтөлгәндәр) бейек булыуҙан тыш (90 сантиметрҙан 1,5 метрға тиклем), ярайһы уҡ киң дә булған (50-нән 80 сантиметрға тиклем).

Сағыштырмаса бейек, һуҙынҡы һауыттар рәтенә солоҡ балын йыйыу, алып ҡайтыу һәм һаҡлау өсөн ҡулланылған бал батмандарын индерергә мөмкин. Уларҙың оҙонлоғо (45-50 см) киңлегенән яҡынса ике тапҡырға артыҡ булған. Бал батмандарының ҡапҡасы ныҡлы ябылған, ҡайһы саҡта һауытҡа нығытылып та ҡуйылғандар һәм биге булған. Ҡайыш тотҡаһы һырлы сығынтыларына нығытылған. Ҡымыҙ көбөләре кеүек үк, был һауыттар ҙа йыш ҡына биҙәлгән һәм бик юғары баһаланған.



*Белорет районы Сәрмән ауылы музейындағы соҡоп эшләнгән һауыт-һаба, 1976 йыл. Т.К. Сурина фотоһы*

Хужалыҡта шыйыҡлыҡ өсөн тәғәйенләнгән 6-10 литрлыҡ һауыттар күп ҡулланылған, уларҙы "биҙрә" тип берләштерергә лә була, "күнәк", "тәпән", "ағас силәк" тип тә йөрөтәләр. Уларҙың ҡайһы берҙәренең тотҡаһы ҡыл бауҙан эшләнгән һәм һөт һауыу өсөн ҡулланылғандар; "һауғүнәк", "бейә һауғыс" тип аталғандар. Икенселәре, ҡапҡаслылары, ризыҡ һаҡлау өсөн тотонолған: май (май күнәге, май тәпәне), бал (бал күнәге, бал тәпәне), ит, ҡаҙ һ.б. тоҙлау. Был һауыттарҙың бейеклеге 25-30 см тирәһе булған, һирәк кенә 40 см итеп эшләнгән һәм тик бер нисә сантиметрға ғына киңлегенән оҙонораҡ булған. Икмәкте ҡомалаҡ әсеткеһенә бешереү киң таралып киткәс, бындай һауыттарҙың береһен әсетке күнәгенә (икмәк күнәге) әйләндергәндәр. Икмәк бешереү күпкә алдараҡ үҫешкән төньяҡ райондарҙа әпәй силәге көн дә ҡул икмәк бешерелгән Башҡортостандың көньяғындағына ҡарағанда күпкә ҙурыраҡ булған.



*Боронғо бишбармаҡ табағы, көбәләр һәм киле. Бөрйән районы Асҡар ауылы, 1980 йыл. Автор фотоһы*



*Ағас һауыттар. РЭМ фондтарынан. XX б. башы. Рәссамы И.Ф. Кибальник*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

БАТЫРЛЫҠ МӘКТӘБЕ

# ЯРТЫ БЫУАТТАН ҺУҢ...

## тағы баш ҡалҡытты был яуызлыҡ

**(Башы 3-сө биттә).**



Профессионаллеге һәм оҫта эш итеүе арҡаһында Денис алдына ҡуйылған бурысты үтәй. Махсус операцияла ҡатнашҡан ваҡытта уның дивизионы 2 танкыны, 2 танкыға ҡаршы батареяны, 4 терәк пунктын, 3 утты көйләүселәр позицияһын, 12 блокпосты һәм Украина ҡоралды көстәренең 50 хәрби хеҙмәткәрен юҡ итә. Дивизион үҙе 5 тапҡыр ҡеүәтле артиллерия уты аҫтында ҡала, мина баҫыуына эләгә һәм мина ҡыры аша үтә, бер нисә тапҡыр нацисталарҙың эҙәрлекләүенән ҡаса. Ҡустым бер нисә ваҡиға тураһында ентекле һөйләргә рөхсәт итте.

**...** Ҡустымда корректировкалаусы капитан татар милләтенән була. Разведка отряды тапҡан сәптәрҙе раҫлау буйынса (доразведка) заданиеға сыға. Тапҡас, код менән уның характерын һәм координаттарын тапшыра. Әммә артиллерия дивизионы иҫәп эшләп ут асыуға сәп урынын алмаштырған була. Башта Денис дошманға уңыш йылмайҙы, тип уйлай, әммә дүрт тапҡыр шулай ҡабатланғас, дошмандың уларҙың һөйләшеүен ишетеп тороуы аңлашыла. Шунан Денис корректировкалаусы менән эфирҙа башҡортса һөйләшә башлай. Сәптәр бер-бер артлы юҡ ителә... Дошман аптырап ҡала... Ә полк командиры ҡустыма: "Башҡорттар, маладис!" - ти. Ҡустымдың ауыҙы касканың бер осонан икенсеһенәсә йырыла. Беренсенән, ул бала сағында балалар баҡсаһында уҡ өйрәнгән башҡорт халыҡ йыры "Любизар"ҙы иҫенә төшөрә, икенсенән, күҙе яраланған полк командиры Кутузов кеүек үк күҙен бәйләп йөрөгән була. Шулай итеп, 200 йылдан ашыу ваҡыт үткәс, полк командиры үҙе лә һиҙмәҫтән Кутузовтың һүҙҙәрен ҡабатлай. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорттар 28 еңел кавалерия полкы бирә, улар Польшала хәрби хәрәкәттәрҙә, Берлинды алыуҙа ҡатнаша. Һуңынан Калишск союз килешеүенә ҡул ҡуйыла һәм ул французлар ҡаршы коалиция төҙөүгә нигеҙ һала. Башҡорт полктары Нидерландтарҙы азат итә, Парижға етә. Уларҙы разведка йәки дошмандың тәрән тылына рейдтар өсөн файҙаланалар. Башҡорттар Наполеонды еңеүгә ҙур өлөш индерә һәм шуның өсөн Кутузовтың шәхсән: "Любезные вы мои башкирцы, молодцы", - тип маҡтауына лайыҡ була.

**...** 16 мартта дивизион колоннаһының алдында барған бронялы "Медведь" КамАЗ машинаһы танкыға ҡаршы минаға эләгеп шартлай. Денис күп һанлы ярсыҡ яралары ала, быуындары ҡаймыға, һөйәктәре һына, контузиялана. Ғәҙәте буйынса, тайған урындарын үҙе ултырта, шартлаған машинанан сығып, үҙенә беренсе ярҙам күрһәтә һәм кесе офицерға эвакуацияланырға ярҙам итә. Хәҙер артналет башланасағын аңлап, хатта төҙәлөштәге бригадир оялышынан ҡолаҡтарына тиклем ҡыҙарлыҡ ҡатлы-катлы һүгенеү һүҙҙәрен ҡулланып, личный составты тиҙ арала шартлау урынынан китергә мәжбүр итә. Хәл шуның менән ҡатмарлаша: артабан миналар ҡуйылған ялан буйлап хәрәкәт итергә тура килә. Миналар арлы-бирле генә йәшерелгән һәм яйлап барғанда уларҙы күрергә була. Әммә бәрәү ҙә беренсе булып барырға теләмәй. Дөрөҫөн әйткәндә, артдивизиондың личный составы ғына түгел, разведка бүлексәһе лә ҡурҡа. Денис тағы ла алдағы машинаға ултырып, водителгә, миналарға эләкмәҫ өсөн маневрҙар өйрәтеп, личный составты һәм разведчиктарҙы мина яланынан алып сыға...

Был ваҡытта ҡанында адреналин уйнағандыр, моғайын, сөнки шартлы рәүештә хәүефһеҙ һаналған урынға сыҡҡас, ауыр эҙемтәләр башлана: хәле бөтә, тәне һыҙлай. Ике тәүлек урынынан тормай ята ул, ашамай, йәһыу ғына эсә. Шул ваҡытта ла эргәһендә һәр саҡ телефонист була, уның аша гвардия майоры ҡул аҫтындағылар менән идара итә. Өсөнсө көнөнә аяғына баҫа, әммә ауыртыныу шул тиклем көслө була, ул хатта автоматын ҡулбашына аҫа ла алмай. Һалдаттар үҙҙәренең промедолдарын килтерә, әммә гвардия майоры уларҙы ҡабул итеүҙән баш тарта - уға айыҡ аҡыл һаҡлау мөһимерәк була. Ике аҙна Денис рух, ихтыяр көсө менән, ауыртыуҙы баҫа торған дарыуҙар ҡабул итмәйенсә, командалыҡ итә, һуңынан ғына ҡайтырға команда бирелә. Хәрби госпиталдә генә ул үҙенең ярсыҡтарҙан ғына яраланмағанын, ә пуля эләгеүен дә, тайған урындары булыуын да, эске ағзалары, башы контузияланыуын һәм ике ҡалаҡ һөйәгенең дә һыныуын белә...

**...** Ялалары, һыҙланыуҙары тураһында госпиталдә ятҡанда ҡустым ошоларҙы һөйләгәйне: "Ағай, минә таңда бик ауыр. Бөтә тән ауырта һәм һыҙлай. Ауыртыуҙы баҫыусы дарыуҙар ҡулланырға ярамай. Майҙар ғына һөртәм. Улар ярҙам итмәй. Уянам да, зарядка эшләргә үҙемде оҙаҡ көйләйем. Зарядкаһыҙ бөтөнләй насар. Ауыр һәм һыҙландыра. Беләһеңме, ағай, мин һис үкенмәйем. Әгәр мине ҡабат ошо бурысты үтәргә ҡуйһалар - ике уйлап тормай, уны үтәргә китер инем. Беләһең бит, был минең беренсе сирҡаныс алыу түгел. Әммә быға тиклем булғандары был махсус операциянан бик ныҡ айырыла. Унда мин бандформированиеларҙы һәм башҡаларҙы тар-мар итә инем. Ә Украинала башҡаса. Был - берләшкән Яуызлыҡҡа ҡаршы һуғыш. Шуға күрә мин ошо яуҙа булыуыма үкенмәйем. Һеҙгә, граждан тормошонда былдағы ҡәбәхәтлек хатта төшөгөҙгә лә инмәй. Был хаҡта һеҙ хәрби хәбәрселәрҙән түгел, ә хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусыларҙан белергә тейешһегеҙ. Был нацистик шаҡшылыҡ ярты быуаттан һуң ҡабат баш ҡалҡытмаһын өсөн, уларҙы ер өҫтөнән ҡырып-һепереп, ер аҫтына өс метр тәрәнлектә фугас һәм термобарик боеприпастар менән яндырып бөтөрөргә кәрәк..."

**...** Мин үҙем яңыраҡ бейек урындан төшкәндә алға һуҙылған ҡулыма ҡоланым. Бик ныҡ ауыртты, хатта ҡоҫҡо килде. Ҡулбашымды һындырғанмын икән тип уйланым. Көс-хәл менән машинаға барып етеп, үҙемә беренсе ярҙам күрһәттем. Бәрелгән урынды зеленка менән эшкәртеп, ҡулымды косынкаға элгәндә ҡустым тураһында уйланым: уға ниндәй ауыртыныу кисерергә тура килгән, ул ҡайҙан үҙендә үҙенә беренсе ярҙам күрһәтерлек, янған машинанан сығып, хеҙмәттәшенә ярҙам күрһәтерлек көс тапҡан икән? Башҡа һыйырлыҡ түгел... Бары тик мейене: "Гвозди бы делать из этих людей, не было б крепче в мире гвоздей", - тигән юлдар ғына сүкене.

Был поэманы юҡҡа ғына иҫләмәнем. Бер нисә көндән ҡустым шылтыратты һәм хәрби психологҡа булыуы тураһында һөйләне. Табиптың бурысы - махсус операциянан һуң яугирҙарҙың рухи торошон тотороҡландырыу. Әммә ҡабул итеү һуңында хәрби табип үкһеп илай, ә ҡустыма уны тынысландырырға тура килә. Ҡабул итеү ҡалып буйынса башлана: "Махсус хәрби операцияға ҡасан индегеҙ? Ниндәй бурыстар башҡарҙығыҙ? Күпме снаряд аттығыҙ?" Ҡустым: "Белмәйем, иҫәпләмәнем", - ти. Табип:"50-нән ашыумы?"- тип нығыша. Ҡустым: "800-ҙән ашыу..."- ти.

Табип: "Нисә тапҡыр артиллерия уты аҫтында ҡалдығыҙ?" - ти. Ҡустым: "Биштән артыҡ..." - тип яуаплай. Табип: "Нисә тапҡыр һәм нисә көн ҡамауҙа булдығыҙ?" - тип һорай. Ҡустым: "Камауҙа һәр ваҡыт булдыҡ. 24 февралдән 1 апрелгә тиклем фронт һыҙығынан 200 километр төптә, дошмандың тәрән тылында бер һаҡһыҙ хәрби бурыс үтәнем..." - ти.

Бер нисә һорауҙан һуң махсус өйрәтелгән хәрби психолог үкһеп илай, ә ҡустым, артиллерия гвардия майоры, уны тынысландыра...

Табип ҡатын тынысланғас, ҡабат һорауҙар бирә башлай: "Хәҙер ҡапыл яңғыраған тауыштарҙы нисек ҡабул итәһегеҙ? Ҡурҡаһығыҙмы?" Ҡустым тыныс ҡына ултыра, "Юҡ, ҡурҡытмай", тип яуаплай... Һәм шул саҡ ел тәҙрә форточкаһын шапылдатып ябa... Ҡустым нисек өҫтәл аҫтында ултырғанын үҙе лә һиҙмәй ҡала. Табип уға ҡарап, күҙ йәштәре аша көлә һәм: "Минең һорауыма яуап бирҙегеҙ инде", - ти. Быны шулай беҙҙең яугирҙарҙы хәрби психологтар эмоциональ йөктән арындыра. Форточка ла ябай түгелдер, ә махсус, дәрәжәле, вазифалы һәм Оборона министрлығында эшләнгәндер, тип уйланыла хәҙер.

**...** Шулай итеп, борон-борондан шундай рухи ихтыярлы офицер һәм һалдаттар хәрби низағтарҙа Рәсәйгә Еңеү яулай ҙа инде. Аллаһы Тәғәлә һинә көс бирһен һәм тиҙерәк һауыҡ, ҡустым. Һин башҡорт халҡының гәйәр яугир-батырҙарының лайыҡлы улыһың, ҡаһарманлығыңды атайолатайҙарыбыҙҙың хәрби ҡаһарманлығы менән бер рәткә яҙыуға лайыҡлыһың!

**Ренат ХИЛАЖЕВ.**

✓ *Ихтилал баҫтырылыу менән башҡорт ерҙәре күпләп тартып алына, ерһеҙ ҡалған юрмый халҡы типтәрҙәр сословиеһына күсерелә. Улар барыбер башҡортлоғон онотмай, документтарҙа "башҡорттан типтәрҙәр", тип яҙыла.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЮРМЫЙҘАР - САЛ ТАРИХ ШАҺИТТАРЫ БЕҘ



Юрмый ырыуы башҡорттарының башҡа бер башҡорт ырыуҙары менән ҡәрҙәшлеге хаҡындағы мәғлүмәт шәжәрәләрҙә лә сағылыш таба. Дин әһеле, яҙыусы һәм мәғрифәтсе Тажетдин Ялсығол әл Башҡорди үҙенең "таварих" жанрында яҙылған әҫәрендә ("Тарих намә-и булғар") Юрмыйҙы Бәкәтундың улы, Иштәктең ейәне итеп күрһәтә. Башҡорт шәжәрәләрендәге Иштәк исеменең башҡорт халҡына ситтән бирелгән исем, йәғни эпоним сифатында ҡулланылыуы билдәле. Төньяҡ башҡорттарының төп бабалары исемлегенә ингән Әйле, Байлар, Байҡы, Ирәкте һәм Салйоғот Юрмыйҙың бер туған ҡәрҙәштәре, тип иҫәпләнгән.

XVII быуаттың икенсе яртыһында, XVIII быуаттың 30-сы йылдарында батша Рәсәйе хөкүмәте Кама аръяғы һәм Яңы Кама аръяғы оборона линиялары төҙөтөү сәбәпле, юрмыйҙарҙың Бөгөлмә өйәҙендәге аҫаба ерҙәренең байтаҡ өлөшө тартып алына. Юрмыйҙар араһында был хәл оло ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Улар, башҡа башҡорт ырыуҙары вәкилдәре менән бер рәттән, бер-бер артлы ҡубып торған ихтилалдарҙа ҡатнаша. Юрмый олоҫо башҡорто Солтан-Морат Дүскәев 1735-1740 йылдарҙа барған ҡанлы көрәштә яу башы сифатында ырыуҙаштары менән бик әүҙем хәрәкәт итә. Әммә ихтилал баҫтырылыу менән ошо яҡтарҙағы башҡорт ерҙәре күпләп тартып алына, ерһеҙ ҡалған байтаҡ ҡына юрмый халҡы типтәрҙәр сословиеһына күсерелә. Улар барыбер башҡортлоғон онотмай, документтарҙа "башҡорттан типтәрҙәр", тип яҙыла. Хәҙерге Татарстан территорияһына ҡараған ерҙәрҙә йәшәгән ерле юрмыйҙар 1917 йылға тиклем үҙҙәрен аҫаба башҡорт итеп күрһәтә.

Һуңғы йылдарҙа уҙғарылған этногенетик тикшеренеүҙәр юрмый вариҫтарының сығышында төп ике линия булыуын асыҡланы. Ир-ат нәҫеле буйынса улар ике гаплотөркөмдө тәшкил итә: G2a1-P18 һәм N1b. Беренсеһе Төньяҡ Кавказда йыш осрай, ул осетиндарҙа 70 процентҡа етә. Шул уҡ генетик маркер башҡорттарҙан өпәй ырыуына ла хас. G2a1-P18 гаплотөркөмө Иран территорияһында хасил булып, уның бер линияһы Арал буйына, унан Төньяҡ Кавказға таралған, тип иҫәпләнә. Был башҡорт юрмыйҙарының генетик тамырҙары Кавказ ермиҙарына (ермихиондарға) барып тоташыуына бик етди дәлил булып тора.

Юрмыйҙар араһында N1b гаплотөркөмөнә ҡараған кешеләр булыуы лә иғтибарға лайыҡ. Был инде юрмыйҙарҙың бер өлөшөнөң төп бабалары ананьин һәм пьянобор археологик мәҙәниәттәрен хасил иткән кешеләр менән ҡәрҙәш булыуын аңлата (былары Тарихи Башҡортостан ерлегендә бик боронғо замандарҙа уҡ формалашҡан). Ошо уҡ генетик маркер Кама һәм Урта Волга буйында йәшәгән фин-уғыр халыҡтарына (мари, удмурт, коми) хас. Уғыр сығышлы халыҡтар был зонала йәшәгән башҡорттарҙы остяк (иштәк) тип атай, шул уҡ атаманы башҡорттар үҙҙәре лә ҡулланa. Мәҫәлән, Рахманғол исемле башҡорттоң 1635 йылда Ҡырым ханлығы хакимдарына ебәргән мөрәжәғәтендә Ҡаҙан виләйәтендә йәшәүсе ҡәүемдәр телгә алына: "... черемисы, чуваши, иштек-башкурты, ары - все конные и вооруженные...". Тарихсы В.В. Трепавлов башҡорттарҙың үҙ-ара аралашҡанында тап төньяҡ-көнбайышта йәшәүсе ҡәрҙәштәренә ҡарата иштәк атамаһын ҡулланыуына иғтибар иткән.

Юрмый башҡорттары араһынан Башҡортостан тарихында һәм мәҙәниәтендә, дөйөм мосолман мөхитендә сағыу эҙ ҡалдырған байтаҡ ҡына шәхестәр сыға. Ошондай күренекле заттарҙан XVII быуатта танылыу тапҡан суфый шағиры Мәүлә Ҡолой, алдараҡ иҫкә алынған башҡорт ихтилалы етәкселәренең береһе Солтан-Морат Дүскәев, мәғрифәтсе, дини рухиәтсе, яҙыусы, Рәсәй мосолмандарының Диниә назараты мөфтөйө Ризаитдин Фәхретдинов, мәғрифәтсе-шағирҙар Кәбир һәм Фазыл Туйкиндар, башҡорт милли хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан Ғабдрахман һәм Ғәбделәхәт Фәхретдиновтар, яҙыусы, БашЦИК рәйесе Афзал Таһиров кеүек шәхестәр менән барса башҡорт халҡы хаҡлы рәүештә ғорурлана.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 19-сы һанда).**

### *ЙОМҒАҠЛАУ ҺҮҘЕ*

"Киске Өфө" гәзите өс йыл дауамында башҡорт ырыуҙары тарихын тулыһынса башҡорт телендә баҫтырып сығарҙы. Был эште тамам, тип әйтергә була: гәзитебеҙҙә 41 башҡорт ырыуы хаҡында хәҙерге фәнгә билдәле булған тарихи материалдар донъя күрҙе. Беҙ, башлыса, күренекле этнолог, башҡорт академигы Рәил Ғүмәр улы Кузеевтың "Происхождение башкирского народа. Этнический состав, история расселения" тигән монографик хеҙмәтенән һәм Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты грифы аҫтында баҫылып сыҡҡан "История башкирских родов" тип аталған күп томлы китаптарҙан (яуаплы мөхәррире С.И. Хәмиҙуллин) алынған мәғлүмәттәрҙе ҡулландыҡ.

Башҡорт йәмғиәте, ҡаҙаҡтар, нуғайҙар, төркмәндәр, ҡырғыҙҙар, ҡырым татарҙары, ҡарағалпаҡтар, үзбәктәр һәм башҡа төрки ҡәүемдәрендәге кеүек үк, боронғо осорҙарҙан бирле үҙҙәренең ижтимағи йәшәйешен ырыу-ҡәбилә системаһына хас ҡанундар аша ғәмәлгә ашырған. Уларҙың эске тормошоноң ошондай үҙенсәлеген шулай уҡ Төрки, Хазар ҡағанаттары, Дәште Ҡыпсаҡ, Алтын Урҙа дәүләтселегенең кире ҡаҡҡыһыҙ бер сифаты итеп ҡарау фарыз. Был дәүләттәрҙең ижтимағи нигеҙен ырыуҙар системаһы хасил иткән, шунлыҡтан, һәр бер төрки дәүләтендә эль (ил), иләү, уруг (ырыу), олоҫ (улус), аймаҡ, түбә кеүек административ терминдар киң таралған була.

Башҡорт иленең барлыҡҡа килеүендә һәм күп быуатлыҡ тарихында ырыуҙар төп роль уйнаған, уның үҫә һәм ҙурая барған ырыу-ҡәбилә системаһында 40-тан ашыу айырым, үҙаллы берәмектәрҙән торған ырыуҙар номенклатураһы хасил булған. Дөйөм Башҡорт иле составында эске үҙаллылығын бар замандарҙа ла һаҡлап алып ҡала алған башҡорт йәмғиәте XVI быуат урталарынан башлап Рус дәүләтенә ҡушыла башлаған осорҙа ла үҙенең ырыуҙар төҙөлөшө нигеҙендә йәшәүен дауам итә. Тарихи Башҡортостан ерлегендә хасил булған һәр башҡорт ырыуы рус административ ҡоролошонда юридик рәүештә үҙенә тәғәйенләнгән һәм беркетелгән территорияла үҙаллы олоҫ (волость) исемен йөрөтә башлай. Боронғо башҡорт йәмғиәте ырыу демократияһы тип нарыҡлап булған үҙенсәлекле, горизонталь идара итеү ысулын күп быуаттар буйына ғәмәлгә ашыра. Йәмғиәт ағзаларының реаль тигеҙ хоҡуҡлығы, дөйөм эштәрҙә ихлас ҡатнашыуы, ысынбарлыҡтағы ғәмәли ғәҙеллек, ере, иленең азатлығы хаҡына үҙенең йәнен дә ҡорбан итергә әҙер булыуы, ата-бабаларының ғөрөф-ғәҙәттәренә, мәҙәни мираҫына тоғро ҡалыуы - былар барыһы ла ырыу-ҡәбилә ҡанундарының быуаттар дауамында теүәл үтәлә килеүе менән бәйлелер, тип һығымта яһау фарыз. Тап шуға күрә, башҡорт донъяһы үҙ тарихында, ни тиклем генә ауыр заманалар аша үтмәһен, ниндәй генә катастрофик хәлдәргә юлыҡмаһын - ул үҙ-үҙенә, үҙенең тарихи этник берҙәйлегенә - башҡортлоғона тоғро ҡала.

Хәҙерге заманда, кешелек глобаль проблемаларҙы хәл итә алмай ыҙаланған бер мәлдә, башҡорт милләтенең ырыу-ҡәбилә системаһын өйрәнеү урынлымы икән, был хәҙерге заман башҡорт донъяһын кирегә, урта быуаттарға ҡайтарыуға өндәү һымаҡ тойолмаймы икән, тигән фекерҙәр ҙә бар. Быға мин бер генә дәлил менән яуап бирер инем: ул Әхмәт-Зәки Вәлиди Туғандың башҡорт халҡының киләсәгенә ҡарата белдерелгән үлемһеҙ фекере: "Мин үҙем, боронғоларҙы белгәнлектән, уңышһыҙлыҡҡа осраған сәғәттәрҙә һис бер ваҡыт күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәнем. Иҫкә алынған ҡәүемдәр хөрриәт өсөн ватандарын ҡалдырып киткән, әммә хөрриәт ҡаҙанған. Беҙҙең милләтебеҙ, аҡтамыр киҫәге кеүек, тупраҡ араһында бәләкәй генә киҫәге ҡалһа ла, яңынан терелеп, бөтөн баҡсаға таралыр".

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,**
**проекттың авторы.**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Батырҙарға ла ял кәрәк

Дошман тылына дәһшәтле рейдтан һуң 7-се гвардия корпусы Көньяҡ-Көнбайыш фронттың резервына сығарылырға тейеш була: рейд барышында корпус составындағы 3 дивизия ла күп юғалтыуҙарға осрай. Әммә 1943 йылдың февраль аҙаҡтарында немец командованиеһы тап ошо йүнәлештә контрһөжүмгә күсергә ҡарар итә. Дошман "Көньяҡ" тип аталған армиялар төркөмөн ойоштора, уның составындағы 12 дивизия, шул иҫәптән ете танк һәм бер механизацияланған дивизиялары менән фронтты йырып үтеп, беҙҙең оборонала торған ғәскәрҙе юҡ итергә план ҡора. 7-се гв. корпусы, шул иҫәптән 16-сы гв. атлы дивизияһы ла Северский Донец йылғаһы буйында оборона һуғыштарына йәлеп ителә. Бер аҙҙан һуң беҙҙең гвардеецтар, алһыҙ-ялһыҙ көйө ҡанлы алыштарҙа ҡатнашып, сикһеҙ арығанлыҡтан, армияның 2-се эшелонына, Кременная станицаһы районына сығарыла. Бында корпус апрель урталарына тиклем тора. Беҙҙең 16-сы атлы дивизия Орехово ауылы эргәһендә тупланып, артабан Ворошиловград ҡалаһының төньяҡ сигенә табан хәрәкәт итергә тейеш була.

1943 йылдың 27 февралендә яугирҙарға бүләктәр менән Башҡортостан делегацияһы килеүе хаҡында дивизия штабына хәбәр килә. Шул уҡ ваҡытта дивизияға Туймазы ҡалаһындағы 9-сы запас атлы полктан өҫтәлмә көстәр ҙә килеп ҡушыла. 1 мартта полктарҙа яуҙарҙа сыныҡҡан ветерандарға тантаналы рәүештә гвардиясы значоктары тапшырыла.

Дивизияның боевой хәрәкәттәре журналында ошондай мәғлүмәттәр теркәлгән: 1943 йылдың 9 мартында дивизия командованиеһы Башҡорт АССР-ы делегацияһы менән осраша. Башҡортостан халҡынан яугирҙарға тәғәйенләнгән 26 вагон бүләк алып килена. Делегацияны ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетының пропаганда һәм агитация буйынса секретары Әбүбәкер Усманов етәкләй. Делегация составында күренекле әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре, яҙыусылар Сәғит Агиш, Кирәй Мәргән, йырсы Хәбир Ғәлимов, ҡурайсы Ғата Сөләймәнов, актерҙар Зәйтүнә Бикбулатова, Ғабдулла Шамуков, Ольга Калинина, балетмейстер Фәйзи Ғәскәров, рәссамдар Ғәлиә Имашева, М. Н. Арыҫланов, Шишмә районынан йыраусы-импровизатор Сәйет Исмәғилов, Кушнаренко районынан ауыл советы рәйесе Даянова, оборона заводы вәкиле Голубина, БАССР-ҙың аҙыҡ-түлек сәнәғәте халыҡ комиссары Г. Бикмәтова була.

Яугирҙарға Башҡортостан халҡы сәләмен делегация етәксеһе Ә. Н. Усманов еткерә. Ошо кисәлә батырлыҡ өлгөләре күрһәткән яугирҙарға ҡиммәтле исемле бүләктәр тапшырыла. Ошондай бүләктәр алыусылар араһында капитан Красиков, лейтенанттар Хәкимов, Шәрипов, Гәрәев, сержант-артиллерист Әхмәров, сержант Ғайсаров һәм башҡалар була.

Икенсе көндә башҡорт милли сәнғәте вәкилдәре Кременная станицаһының үҙәк клубында концерт менән сығыш яһай. Хушлашыу кисәһендә Башҡортостан халҡының яугирҙарға һәм башҡорт атлыларының үҙҙәренең яҡташтарына төбәп яҙылған хаттары иғлан ителә. Тыуған яҡтарҙан ебәрелгән хатта ошолай тип әйтелә: "Һеҙ үҙегеҙҙе үҫтергән халыҡтың намыҫына тап төшөрмәнегеҙ, һеҙҙең атайҙарығыҙ һәм әсәйҙәрегеҙҙең сал сәстәренә бысраҡ яҡманығыҙ... Үҙебеҙҙең тыуған һәм һөйгән балабыҙ - Башҡорт атлы дивизияһы немец баҫҡынсылары менән Ватаныбыҙ өсөн барған алыштарҙа ҡыйыулыҡ, ныҡлыҡ, ҡаһарманлыҡ һәм героизм күрһәткәне, дисциплиналы һәм ойошҡан булғанлығы өсөн гвардия байрағын алған саҡта нисек итеп ғорурланыуыбыҙ хаҡында һүҙ ҙә етерлек түгел".

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ 34 залыбыҙ бар һәм уларҙың һәр ҡайһыһы бер тематиканы үҙ эсенә ала. Әгәр ниндәйҙер тема буйынса дәресте музейҙа үткәрһәләр - беҙ шат ҡына, сөнки бында балалар экспонаттарҙы үҙ күҙҙәре менән күрә.*

# МУЗЕЙ ТИП һәр экспонат бында

**Тарих менән ҡайҙа күҙгә-күҙ ҡарашып, өнһөҙ генә аңлашырға мөмкин? Эйе, әлбиттә, музейҙа, сөнки унда һәр экспонат, һәр таш тарих һөйләй, бары тик телдәрен генә аңлай белергә кәрәк. Аңламаған хәлдә лә борсолаһы түгел - улар менән һин дә мин аралашыусы экскурсоводтар һеҙҙе шунда уҡ мауыҡтырғыс әңгәмәгә алып инер, хатта һуңынан: "Эх, ваҡыт саҡ ҡына яйыраҡ аҡһа булмай инеме икән?" - тип, уфтанып та ҡуйырһығыҙ әле. Бөгөн республиканың иң төп музейы һаналған Милли музейға сәйәхәт ҡылып, уның директоры вазифаһын башҡарыусы Рөстәм ИСХАҠОВ менән тарихты һаҡлаған ошо учреждениеның "эс серҙәренә" инергә тырыштыҡ.**

**Милли музей - ул бөгөн Башҡортостанда иң баш музей булып иҫәпләнә. Был "ғаиләгә" тағы күпме музей инә, нисә филиалығыҙ бар, ниндәй хәстәрҙәр менән йәшәйһегеҙ?**

- Ысынлап та, Башҡортостан Республикаһының Милли музейы - ул үҙе генә айырым бер бинала урынлашҡан музей түгел. Уның функциялары ныҡ күп һәм иң тәүҙә ул республикалағы 106 музейҙы берләштерә. Уларҙың һәр береһе айырым юридик шәхес булып тора. Шулай уҡ беҙҙең 10 филиалыбыҙ (Әбйәлил районы тарихи-тыуған яҡты өйрәнеү музейы, Ш.Ә. Хоҙайбирҙиндың Өфөләге йорт-музейы, Дүртөйлө районы тарихи-тыуған яҡты өйрәнеү музейы, С.Т. Аксаковтың мемориаль йорт-музейы (Өфө), Көҙәндәге Әхмәтзәки Вәлиди музейы (Ишембай районы), Салауат Юлаев музейы (Салауат районы), Аксаковтар ғаиләһе музейы (Бәләбәй), Теләс тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы, Туймазы тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы, В.И. Альбанов исемендәге ҡотопсолар музейы (Өфө) бар. Әлеге ваҡытта ике - Өфөлә Шәһит Хоҙайбирҙин музейы һәм Теләстә тарих-тыуған яҡты өйрәнеү музейы ремонтҡа ябылды. Улар ҙур реконструкция кисерәсәк һәм тулыһынса яңыртылған заманса музей булып ҡабаттан асылыр тип көтәбеҙ.

Шулай уҡ бөгөн өр-яңы 8 музей эшләү менән шөғөлләнәбеҙ, улар Республика Башлығы Радий Хәбировтың күрһәтмәләренә ярашлы тормошҡа ашырыла. Мәҫәлән, береһе бөйөк йырсы Шаляпинға һәм уның тормош, ижад юлына арналған музей буласаҡ. Уны быйыл асырға иҫәп тотабыҙ, дизайн проекты, башҡа документтар барыһы ла әҙер, финанслау көтәбеҙ. Тағы бер музей "Ҡайтарылған исемдәр" тип атала һәм әлеге ваҡытта 34 шәхестең исемлеге бар, документтары әҙер һәм уны ла быйыл асырға өмөтләнәбеҙ. Ул дүрт өлөштән тора һәм уға сәйәси, дини, мәҙәни һ.б. эшмәкәрҙәр инә, араларында губернаторҙар ҙа, репрессияға эләгеүселәр ҙә бар. Шулай уҡ Башҡортостанды үҫтереүгә күп көс һалған, ҙур роль уйнаған, ҙур өлөш индергән, әммә төрлө сәбәптәр арҡаһында онотолоуға дусар булған кешеләрҙең исемдәре һәм уларға арналған экспозициялар буласаҡ.

Тағы ла "Тимер юл музейы" асырға ниәтләйбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, ул Рәсәй Тимер юлдары тарихы музейы буласаҡ һәм унда Башҡортостандың был өлкәләге ҡаҙаныштары ла ҙур урын алып торасаҡ. Төп эште Рәсәй Тимер юлдары яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт үҙе алып бара, ә беҙ уларға ҙур теләк менән ярҙам күрһәтәбеҙ.

Шулай уҡ Луганск Халыҡ Республикаһында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына һәм уның легендар комдивы Миңлеғәли Шайморатовҡа арналған музей булдырырға иҫәп бар. Бөгөн ошо йәһәттән дә эш алып барыла. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы әүҙем ҡатнаша, республиканың бик күп ойошмалары ҙур ярҙам күрһәтә, йәғни дөйөм уртаҡ маҡсат менән йәшәйбеҙ.



Стәрлетамаҡ районында 1812 йылғы Ватан һуғышы геройы Ҡаһым түрәгә арналған музей асыу йәһәтенән дә ҙур эштәр башҡарыла, бында төп эшмәкәрлекте район алып бара, әммә беҙ методик үҙәк булараҡ һәр яҡтан ярҙам итәбеҙ.

Бөгөн барыһына ла мәғлүм булыуынса, Совет майҙанында - баш ҡаланың уртаһында Шайморатовҡа арналған монументаль һәйкәл эшләнә. Уның эргәһендә республиканың визит карточкаһына әүерелерлек музей ҙа асылһа, бик шәп буласаҡ. Һәйкәлгә килеүселәр шунда уҡ уға инеп, республика менән ҡыҫҡаса ғына танышып, күңелдәрендә Башҡортостанға ҡарата һөйөү һәм ғорурлыҡ хисе уянып сығырҙар ине. Уның дизайн проекты бар, әммә ҡарар ҡабул ителмәгән.

**Бөгөн йәштәрҙә генә түгел, барлыҡ халыҡта патриотизм рухын тәрбиәләү һәм һаҡлау мәсьәләһе төп урында тора. Был йәһәттән музейҙар ниндәй эшмәкәрлек алып бара?**

- Был, әлбиттә, беҙҙең төп эшебеҙ, сөнки ниндәй генә күргәҙмә йәки сара ойоштормайыҡ, уның нигеҙендә илһөйәрлек тәрбиәһе ята. Мәҫәлән, яңыраҡ ҡына Александр Беренсегә арналған күргәҙмә астыҡ. Ул беҙҙең үҙебеҙҙең күргәҙмә түгел, Көньяҡ Урал дәүләт музейынан килтерелгән күсмә күргәҙмә, әммә унда бик күп ҡыҙыҡлы ваҡиғалар һәм факттар сағылдырыла. Башҡортостанда, ғөмүмән, Өфөлә, ике император булған: беренсеһе Александр Беренсе һәм икенсеһе Николай Икенсе. Николай Икенсе Өфө вокзалында ғына булған, әммә Александр Беренсе шул ваҡытта ҡаланы күргән, ундағы сараларҙа ҡатнашҡан, халыҡ менән аралашҡан. Ошо күргәҙмә аша беҙ ул саҡтағы ваҡиғалар уртаһында ҡайнайбыҙ, батшаларҙың төбәккә мөнәсәбәтен күрәбеҙ, реформалар һәм башҡа бик күп тарихты асыҡлайбыҙ. Батшаларҙың ҡылған ғәмәлдәрен сағыштырабыҙ, бөгөнгө менән параллель үткәрәбеҙ, һығымталар яһайбыҙ. Ул заманда Рәсәй империяһының иң көслө осоро була, ул Наполеонды еңә. Ошоларҙан сығып ҡараһаң, ысынлап та, һәр экспозиция хәрби-патриотик тәрбиә биреп, тыуған илгә һөйөү тойғоһо уятып ҡына ҡалмай, ғаилә мөнәсәбәттәре, балаларҙы тәрбиәләү өлгөһө булып та тора. Шулай уҡ башҡа ойошмалар менән хеҙмәттәшлек сиктәрендә музейҙа түңәрәк ҡорҙар үткәреүҙе лә әүҙемләштерергә кәрәк. Мәҫәлән, республика генералдарының барыһы хаҡында ла белеп бөтмәйбеҙ, ә улар бик күп. Ябай ауыл малайҙарының ошондай юғары дәрәжәгә етеү тарихы балаларға ғына түгел, ололарға ла ҡыҙыҡ булыр ине, моғайын.

Яңы ғына "Һуғыш кешеһе" тигән күргәҙмә астыҡ. Унда республиканың эҙәрмәндәр отрядтары элек һуғыш барған урындарҙа ҡаҙыныу эштәре алып барғанда тапҡан артефактар урынлашҡан. Улар менән танышып, һуғыштың ауырлығын, халыҡтың ниндәй әйберҙәр ҡулланғанын тойғандай булаһың.

"Үҫемлектәр - тормош биҙәге" тигән күргәҙмә тәбиғәт менән бәйле һәм тирә-яҡ мөхиткә һөйөү һәм һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү сараһы. Унда Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән үҫемлектәр урын алған һәм уларҙың тормошобоҙҙағы роле, әһәмиәте күрһәтелә, милли кейемдәрҙәге үҫемлек биҙәктәренең нимә аңлатыуы тураһында мәғлүмәт бирелә. Һәр күргәҙмә-экспозиция тураһында оҙон-оҙаҡ һөйләргә мөмкин, әммә ҡыҫҡаса әйткәндә - уларҙың һәр ҡайһыһына тәрбиәүи мәғәнә һалынған.

Иҫтәлекле, билдәле даталарға ҡарата һәр саҡ ниндәйҙер сара үткәрергә тырышабыҙ һәм ул исем өсөн генә түгел, ә килеүселәр өсөн мәғлүмәти, файҙалы булырға, шул уҡ ваҡытта улар шул сара сиктәрендә ойошторолған оҫталыҡ дәрестәрендә үҙҙәре ҡатнашып, нимәлер эшләп ҡарарға тейеш.

**Бөгөн белем усаҡтарында төбәк компоненты бөтөрөлдө, тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетһәк тә, улар бар һәм һәр звенола билдәле бер күләмдә һаҡланып ҡалған. Ә бына мәктәптәргә ошо мөмкинлекте файҙаланып, дәрестәрҙе музейҙарҙа үткәрергә була бит. Был йәһәттән хәҙер Пушкин карталары индерелеүе лә ҙур мөмкинлектәр аса. Һеҙгә уҡыусылар, студенттар йыш киләме, ниндәй уҡыу йорттары менән хеҙмәттәшлек итәһегеҙ?**

- Үҙебеҙгә шундай миссия алғанбыҙ һәм шул юҫыҡта эшләйбеҙ ҙә инде. Бая әйтеп китеүемсә, республика буйынса булған барлыҡ музейҙарыбыҙ һәм филиалдарыбыҙ ҙа мәҙәни-мәғрифәтселек менән шөғөлләнә. Милли музейҙа әлеге ваҡытта 34 залыбыҙ бар һәм уларҙың һәр ҡайһыһы бер тематиканы үҙ эсенә ала. Әгәр ниндәйҙер тема буйынса дәресте музейҙа үткәрһәләр - беҙ шат ҡына, сөнки бында балалар экспонаттарҙы үҙ күҙҙәре менән күрә, ҡайһы берҙәрен тотоп та ҡарай ала. Парта артында ултырып өйрәнеү менән ошо осорҙо сағылдырған мөхит эсендә йөрөү араһында айырма бик ҙур. Мин "Яңы Иерусалм" тип аталған музейҙа булғайным. Унда балалар



***✓ Әлеге ваҡытта 275 меңдән ашыу экспонатыбыҙҙың экспозицияла ни бары 2,5 проценты ғына файҙаланыла. Әгәр фондтарҙы һаҡлау урыны булһа, бөгөн уларҙың барыһын да экспозиция залдары итеп эшләргә булыр ине.***

# КЕНӘ ҠАРАМА -

## тарих һөйләй

туп-тулы ине һәм барыһының да ҡулында планшет. Уҡыусылар өсөн ниндәйҙер сара үтә ине һәм берәү ҙә ваҡытын бушҡа үткәрмәй. Шулай уҡ тематик олимпиадаларҙы ла ошо музейҙа үткәрәләр. Беҙҙә лә ошо алымды ҡулланырға ине тип уйлайым. Әлбиттә, бөгөн төрлө оҫталыҡ дәрестәре, ниндәйҙер тарихи дәрестәр үтә, әммә улар даими түгел. Музей - ул килеп кенә йүгереп ҡарап сыға торған урын түгел бит, ул тере организм кеүек - үҙгәрә, үҫә, тематикаһы алмашынып тора, шулай уҡ кеше үҙе үҫкән һайын уның донъяны ҡабул итеүе лә үҙгәрә.

**Уҡыусыларҙы йәлеп итеү йәһәтенән хәҙер Пушкин карталары индерелеүе лә ҙур мөмкинлектәр аса түгелме?**

- Пушкин картаһы бик файҙалы алым булды тип уйлайым. Сөнки үҙемдән алып әйтәм, бала саҡта ауылға "Карауанһарай" төркөмө концерты килгәйне. Билет хаҡы 50 тин. Атай командировкала, әсәй өйҙә булманымы икән, әммә мин 50 тин аҡса таба алмай, концертҡа бара алмағайным. Ул сығыш ауыл халҡының күңел торошон аҫтын-өҫкә килтереп әйләндергәйне, битарафлыҡтан арындырғайны, дәрт өҫтәгәйне. Һуңынан барыһы ла тәьҫораттарын күҙәре осҡонланып һөйләгәндә, ниңә барып, берәй ишектән һыңар күҙ менән генә булһа ла ҡарап торманым икән, тип үкенгәнем һаман да иҫтә. Әгәр ҙә шул ваҡытта Пушкин картаһы булһа, бер ауырлыҡһыҙ концерт ҡарар инем. Был карта, ысынлап та, балаларға киң мөмкинлектәр бирә: театрға барһынмы ул, музейға килһенме, кинотеатрҙарға барһынмы - файҙаға ғына. Шул карта арҡаһында музейға ла балалар күп килә, мәҙәниәткә ылығалар.

Хеҙмәттәшлеккә килгәндә, бөгөнгө бихисап ойошма-учреждение, һөнәри белем биреү, юғары уҡыу йорттары менән килешеү төҙөнөк. Әлеге ваҡытта Өфө кооператив техникумы, сауҙа-иҡтисад колледжы, Өфө дәүләт нефть техник университеты, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы менән әүҙем хеҙмәттәшлек итәбеҙ Әйткәндәй, академияның түңәрәк ҡорҙар, конференциялар үткәреү буйынса тәжрибәһе ҙур һәм майҙансыҡтары ла бар. Беҙ уларҙың тәжрибәһен, мөмкинлектәрен ҡулланырға уйлайбыҙ. Мәҫәлән, улар күптән түгел үҙҙәренең виртуаль музейын асты, уның презентацияһын үткәрҙе. Шуға беҙ ҙә республиканың төрлө учреждениелары менән бергәләшеп, тығыҙ хеҙмәттәшлектә эшләһәк, Башҡортостандың төп музейы үҙенә күрә бер мәҙәнимәғрифәт үҙәгенә әйләнер, уның халыҡҡа, дәүләтебеҙгә файҙаһы күберәк булыр тип күҙаллайбыҙ.

**Санкт-Петербург һәм Татарстан википедистары музейҙар менән берлектә ундағы экспонаттарға QR-кодтар ҡуя башланы - улар туранантура Википедия мәҡәләһенә алып сыға. Ошо йәһәттән Башҡорт Википедияһы менән хеҙмәттәшлеккә нисек ҡарайһығыҙ?**

- Был эш, йәғни экспонаттарға QR-код ҡуйыу алып барыла, ләкин ул һүлпән бара. Әммә беҙ был эште атҡарып сығырға тейешбеҙ, сөнки, ысынлап та, музейҙы ҡарап сығып ҡына күп нәмә белеп булмай. Шуға фекер иғтибарға лайыҡ, уйлашырға кәрәк. Бөгөн беҙҙең музейҙа 275 меңдән ашыу предмет һәм уларҙың һәр ҡайһыһының тарихы бар. Хатта тиңһеҙ тип әйтәйемме экспонатҡа - таш быуатҡа ҡараған таш балтаға эйәбеҙ. Ул бынан 400 мең йыл элек ҡулланылған. Рәсәйҙә шундай дүрт кенә балта булып, береһе - беҙҙең музейҙа һаҡланыуы үҙе бер ғорурлыҡ бит. Әлбиттә, QR-кодтар булһа, был үҙе үк уҡыусыларҙы ла, туристарҙы ла ылыҡтырыр ине. Ауыр эш, әммә беҙ уны атҡарып сығырға тейешбеҙ.

**Милли музей ҡарамағындағы учреждениелар араһында ниндәй үҙенсәлекле музейҙы билдәләргә мөмкин, сөнки хәҙер ниндәй генә музей юҡ: сәғәт музейы, самауыр музейы, ҡумыҙ музейы, сайыр музейы һ.б.**

- Һәр музейҙың үҙенә генә хас үҙенсәлеге бар. Мәҫәлән, Темәс музейы - беренсе баш ҡалабыҙ, уны республикаға нигеҙ һалыныу тарихы музейы булараҡ беләбеҙ, уның үҙенсәлеге шунда һәм унда барып инһәң, тарих төпкөлөнә сумаһың. Әммә заман талаптары күҙлегенән ҡарағанда, бөгөн иң үҙенсәлекле музей булып яңы асылған Валериан Альбанов исемендәге Ҡотопсолар музейы тора. Ул барлыҡ яңы заманса алымдар ҡулланып эшләнгән, хатта унда буран ажғырып торғандай һәм ысынлап та һыуыҡ булып китә. Йәғни музей һине ошо мәлгә алып ҡайта, ҡотопсоларҙың ни тиклем ҡаһарман булыуын аңлайһың - улар бит ил өсөн белә-күрә үлемгә бара, Ҡотопто өйрәнә. Уларҙың ҡаһарманлығы аша беҙ үҙебеҙ өсөн ҡотопто асабыҙ. Һәм беҙҙең маҡсат - киләсәктә барлыҡ музейҙарҙы ла заман талаптарына яраҡлаштырып, заманса алымдар ҡулланып яңыртыу.

**Һәр район территорияһында тигәндәй йыл да тарих буйынса ниндәйҙер яңы фактттар асыҡлана, яңы артефакттар табыла. Ошо артефакттар һеҙҙең музейҙарға килеп етәме һәм улар араһында ниндәй үҙенсәлекле табыштар бар?**

- Яңыраҡ ҡына Әбйәлил районында тарпандың бәләкәй генә итеп эшләнгән һыны табылғайны. Улар уны беҙҙең музейға килтергән, әммә ул ваҡыттағы хужалар, был артефакт түгел, әһәмиәте юҡ, тип алмаған. Һуңынан уны Силәбе музейына тапшырғандар һәм тикшереү үткәрелгәндән һуң уның ысын боронғо әйбер, әллә нисәмә мең йыл элек эшләнгәне асыҡланған. Шуныһы үкенесле, хәҙер ул беҙҙә түгел, икенсе өлкәлә һаҡлана. Ә дөйөм алғанда беҙ боронғо әйберҙәргә төрлө акциялар үткәреп торабыҙ, бик әһәмиәтлеләрен хатта һатып та алабыҙ. Был эш менән күберәген беҙҙең археологтар шөғөлләнә. Күптәре беҙҙең музейға килтерелә, шулай уҡ Республика Археология музейына тапшырыла, археологик материалдарҙың төп һаҡланыу урыны шунда.

**Әлеге вазифаға килгәнгә тиклем Һеҙҙе дәүләт хеҙмәтендә етәксе урындарҙа эшләгән кеше булараҡ беләбеҙ. Ҡапыл эш йүнәлешегеҙ үҙгәрҙе һәм яңы өлкәлә эшмәкәрлегегеҙҙе нисек күрәһегеҙ: электән килгән традицияларҙы дауам итеп, һәүетемсә генә эшләргәме, әллә заман талаптарына тап килгән яңылыҡтар индерергәме?**

- Һәр етәксе ойошма эшенә яңы һулыш индерергә теләй, әлбиттә. Шул уҡ ваҡытта тота килеп һындырырға ла ярамай. Мин әле яңы стратегия булдырырға ниәтләйем. Сөнки музей бар, музей эшләй, Аллаға шөкөр, предметтар етерлек, әммә иртән килеп ишегебеҙҙе асып ингән кешеләрҙе йәки төркөмдәрҙе көтөп ултырырға тейеш түгелбеҙ. Күп кенә музейҙарҙы ҡарайым, күҙәтеп барам һәм улар бөгөн үҙҙәренең музей сигенән сығып ниндәйҙер яңы мәғариф-мәғрифәт учреждениеһына әүерелгәнен күрәм. Беҙ ҙә үҙебеҙгә килеүселәргә үҙ мөхитен булдырыу бурысын ҡуйғанбыҙ. Әңгәмә барышында әйтеп китеүебеҙсә, мәктәптәр менән эшләйбеҙ икән, улар бында дәрес үткәрергә тейеш, хатта дәрес алып барырлыҡ ғалимдарыбыҙ ҙа бар, күргәҙмә залдарыбыҙ ҙа бар, темалар ҙа етерлек. Ғөмүмән, йәштәр менән эшләү ҡыҙыҡ, беҙ уларҙан күп нәмәгә өйрәнәбеҙ. Әле бына Музейҙар төнөн үткәреүҙе планлаштырыу алдынан балаларҙан:"Һеҙ уны нисек күрергә теләр инегеҙ?" - тип һорайым. Балалар музей экспонаттарының киноларҙағы кеүек "тереләп", процесҡа ҡушылып китеүен күрергә теләй. Улар өсөн ошо күренеш ҡыҙыҡ һәм мауыҡтырғыс. Бигерәк тә студенттар менән аралашыу беҙгә файҙалы, сөнки уларҙың күптәре төрлө музейҙарҙа булған, күргән, сағыштырыу мөмкинлектәре бар. Улар шулай уҡ музейҙа мультимедиа саралары күрергә теләй.

Бөгөн һаҡланған фондтарҙы заман талабы буйынса цифрлаштырыу һәм етди виртуаль музей булдырыу ҙа зарур, сөнки ошо юл аша беҙҙең музей менән сит өлкәләр, сит дәүләттәрҙән дә Башҡортостан, башҡорттар тарихы, уның ҡаҙаныштары, мөмкинлектәре менән таныша алырҙар ине. Әлбиттә, был бер көндә генә атҡарыла торған эш түгел, әммә шундай хыялым бар.

**Бөгөн тышҡы һәм эске туризмды үҫтереү тураһында күп һөйләнелә. Туристар, ғәҙәттә, танышыуҙы тәү сиратта музейҙарҙан башлай. Милли музейҙа экскурсиялар нисә телдә алып барыла?**

- Үҙебеҙгә экскурсияларҙы өс телдә алып барыу маҡсатын ҡуйғанбыҙ, әммә әле инглиз телен белгән экскурсоводыбыҙ декрет отпускыһында, шуға күрә башҡорт һәм рус теле менән генә сикләнәбеҙ. Шулай уҡ сайтыбыҙ ҙа әле ике телдә эшләй, уны ла өс телле итеү мотлаҡ кәрәк. Беҙгә Өфөлә уҡыған сит ил студенттары ла килә, әммә улар рус телен дә аңлай, шуға аралашыу ауыр түгел. Мин үҙем төрөк телен яҡшы беләм һәм төрөк телле туристар булһа, уларға ошо телдә экскурсия үткәрә алам.

Рәсәйҙә туристик маршруттар булдырылған һәм, ысынлап та, туристар иң элек Милли музейға килә. Әле бына яңыраҡ ҡына Өфөгә дүрт туристик карап туҡталыш яһыны һәм ундағы туристар беҙгә килде. Бер көн эсендә генә әллә күпме туристы ҡабул иттек. Шуға ошондай туристик маршруттарҙа ҡатнашырға, туристик фирмалар менән хеҙмәттәшлек итергә иҫәп бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡаҙаныштарҙы, уңыштарҙы беҙ былай ҙа күреп, уҡып, белеп торабыҙ, әммә проблемалар һәр саҡ күренмәй ҡала. Милли музейҙың да беҙ белмәгән, әммә кисекмәҫтән хәл ителергә тейешле проблемалары бар. Рөстәм Әхмәт улы әйтеүенсә, бөгөн иң ҙур проблема - музей фондтарын айырым һаҡлау урыны булмауы. "Экспонаттар махсус шарттар, махсус температура булған урында һаҡланырға тейеш, юҡһа, улар йылап юҡҡа сыға башлай. Мәҫәлән, ҡиммәтле төп нөсхәләге картиналар, сармат алтындары коллекцияһының бәләкәй боландары һ.б., уларҙы һаҡлау өсөн дә, күрһәтеү өсөн дә махсус шарттар булырға тейеш. Әлеге ваҡытта 275 меңдән ашыу экспонатыбыҙҙың экспозицияла ни бары 2,5 проценты ғына файҙаланыла. Әгәр фондтарҙы һаҡлау урыны булһа, бөгөн улар һаҡланған бүлмәләрҙең барыһын да экспозиция залдары итеп эшләргә булыр һәм музей залдарының 80 проценты күргәҙмә залы булып хеҙмәт итер, экспозициялар күләмен дә 6 процентҡа тиклем арттыра алыр инек", - ти учреждение етәксеһе.**

**...Быуаттар беҙгә ер ҡуйынында, һандыҡ төптәрендә, халыҡ хәтерендә һаҡланған тарихты түкмәй-сәсмәй алып килеп еткергән, ә беҙ уның бөртөгөнә лә зыян килтермәй, киләсәк быуындарға һаҡлай, тапшыра алырбыҙмы?**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**



Ашнаҡсы теге кешегә ике баш күнәк тотторҙо ла, үҙе икенсе һауыт алырға китте. Күп тә үтмәй, теге кеше күнәктәргә һыу тултырып та бирҙе.

- Тағын кәрәкһә, килтер һауыттарыңды. Мин бында саҡта алып ҡал.

Ят кеше йәнә ике күнәк һыу күтәреп килде. Шунан:

- Ярар, мин киттем, - тип боролдо.

- Рәхмәт,- тип ҡалды ашнаҡсы.

Яугирҙар күңелдәре булғансы һыйланды, сәйҙән һуң ҡурай тартып, йырлашып ултырҙылар. Ҡараңғы төшөп, күҙ бәйләнгәс, һәр кем үҙ урынына ятып йоҡланы.

Иртәгәһенә иртәнсәк был йөҙлөктең өсөнсө, дүртенсе унлыҡтары күптән тороп, сәй ҡайнатып, тамаҡ ялғарға йөрөһәләр, беренсе һәм икенсе унлыҡтар тирәһендә бер хәрәкәттең дә юҡлығына иғтибар иттеләр.

- Кем-кем, әммә Ҡаһым түрә былай оҙаҡ йоҡламай торғайны ла инде, - тип былар ятҡан ергә барһа, өсөнсө ун башлығы тегеләрҙең бөтөнөһө лә ҡуҙғалмай ятҡанын күреп, хафаға төштө. Ерҙә ятҡан Ҡаһым түрә эргәһенә килһә, тегенеһе шаҡырайып ҡатып бөткән. Яҡшылабыраҡ ҡараһа, үлгән.

- Егеттәр! - тип ҡысҡырып ебәрҙе ун башлығы. - Ҡаһым түрә үлгән!

Йөҙҙөң ҡалған яугирҙары йүгерешеп килде. Беренсе һәм икенсе унлыҡтың береһе лә иҫән түгел. Ни булған? Ун алты кеше нилектән бер юлы ятып үлгән? Көнө буйы шул һорауға яуап эҙләнеләр. Ауылдың һәр өйөнә инеп, кисә һыу ташышҡан кешене айҡанылар. Әммә һорауға яуап та, теге бәндә лә юҡ. Ул кеше был тирәлә әллә ҡасандан бирле йөрөй инде. Францианан ҡайтып килгән һыбайлыларҙы көттө, Ҡаһым Мырҙашев тигән кеше менән ҡыҙыҡһынды, тинеләр. Тимәк, башҡорт полкын махсус көтөп йөрөгән һәм ашҡа һыу килтереүҙе һылтау итеп, яугирҙарҙы ағыулаған.

Ҡаһым түрәнең йөҙлөгө илай-илай мәйеттәрҙе ауылдың бер ситенә күмде. Ҡаһымдың ҡәбере өҫтөнә ҙур ғына таш ҡуйҙылар һәм ҡурайын ташҡа беркеттеләр. Шунан һуң егеттәрҙең береһе түҙмәне, ҡысҡырып йырлап ебәрҙе.

Ҡаһым түрә уйынға сығыр ине, вай кем,
Палкауай командир ҡашында.
Ҡаһым түрә вафат булып ҡалды, вай кем,
Владимир губерна башында.
Ҡаһым түрә менгән һор юрғаҡай, вай кем,
Тояҡтары ҡупҡан, баҫа алмай.
Биш йөҙ кеше ҡарап, өнһөҙ ҡалған, вай кем,
Ҡайғырышып, ҡәбер ҡаҙалмай.

Мосолмандарҙа кешене ерләгәндә йырлау, сеңләү тыйылған. Ләкин күп ҡағиҙәнең иҫкәрмәһе булған кеүек, бында ла йырламай түҙә алманы егеттәр. Меңәр саҡрым ер үтеп, йөҙәр-йөҙәр дошмандың башына етеп, Ҡаһым түрә менән ҡуша тағы ла ун биш кеше үлеп ятһын әле. Йырлау ғына түгел, күкрәгеңде тырнап, ҡанатҡансы йыртып иларһың...

## Үҙебеҙҙең гөбөрнәлә

Һуғыш - ниндәй генә аяуһыҙ сара булмаһын, бик күп ҡорбан, ҡыйралыш, янғын менән бармаһын, ҡайһы берҙә бик алама эҙемтәләргә килтерер хәлдәрҙән ҡотҡарып ҡалдыра. Кенәз Волконский Ырымбурҙың генерал-гөбөрнаторы сағында, уның яҡын ярҙамсыларының береһе подполковник Соколовтың һөсөртөүе арҡаһында полк командиры Ибраһим Аҡҡолов менән кантон башлығы Фәрит Юлбарыҫов алдаҡ менән халыҡтан аҡса йыйған өсөн гөбөрнә суды быларҙы хөкөмгә тарттырҙы. Тик хөкөм ҡарарын үтәүҙе һуғыш бөткәс тормошҡа ашырырға булғайнылар. Полк командиры Солтанморат Үтәгәнов шул уҡ судтың ҡушыуы буйынса Ырымбурға килһә, әлеге суд үҙенең яңы ҡарарын уҡып тора.

- Законһыҙ рәүештә ике башҡорт полкы төҙөгән һәм өҫтәүенә уларҙы таратып ебәрә була халыҡтан аҡса йыйған өсөн подполковник Соколов ун йылға һөргөнгә һөрөлөргә тейеш ине. Әммә ул Ватан һуғышында ҡорбан булды, шуға күрә уның менән бәйле бөтөн эш тә туҡтатыла. Ғәйепләнеүселәр Аҡҡолов менән Юлбарыҫов икешәр йылға һөргөнгә оҙатыла, ә Юлбарыҫов кеҫәһенә һалған халыҡ аҡсаһын ҡайтарып бирергә тейеш.

Ә кенәз Волконский императорыбыҙ тарафынан үҙенә тейеш язаһын алған. Ул биләгән вазифаһынан бушатылған һәм пенсияға оҙатылған.

Волконский үҙе ҡалдырған документтар араһында полк командиры Солтанморат Үтәгәнов телгә алына. Әммә Үтәгәнов судҡа килеп етмәү арҡаһында...

Тап шул мәлдә ишек асылды ла, унда Солтанмораттың башы күренде.

- Судья әфәнде, мин бит бында,- тине ул.

- Кем ул "мин"?

- Солтанморат Үтәгәнов.

- Әйҙә, ин әле, ин.

Солтанморат алға уҙып, ултырғысҡа терәлергә самалағайны, судьяның тауышы яңғыраны.

- Ултырмай тор. Судьяның әйткәнен баҫып тороп тыңлау фарыз. Кенәз Волконский үҙе ҡалдырған документтарҙа Солтанморат Үтәгәнов элекке генерал Тевкелев Алексей Ивановичты (башҡорттар уны Тәфтиләүти) нигеҙһеҙ рәүештә башҡорт ерен тартып алыуҙа ғәйепләй. Ул ерҙе тәүҙә ҡуртымға, шунан һатып алған. Документтары бар. Шуға күрә Үтәгәновҡа Тевкелевтар файҙаһына йөҙ һум күләмендә штраф түләргә ҡушырға. Бындай нахаҡ ғәйепләү тағы ла ҡабатлана ҡалһа, аҙағы һөргөн булыуы ихтимал.

- Судья әфәнде,- тип ҡысҡырҙы Солтанморат.- Мин Ватан һуғышы ветераны, мин французларҙы Парижғаса эҙәрлекләп барыусы.

- Бик яҡшы, Үтәгәнов әфәнде. Әммә ил алдындағы һеҙҙең хеҙмәттәрегеҙ кемдеңдер алдындағы ғәйебегеҙҙе аҡлай алмай. Ошоноң менән суд ултырышы тамам! - тип судья өҫтәлгә ағас сүкеше менән һуҡты.

Шул саҡта тышта ирҙәрҙең көр тауыш менән берҙәм йырлағаны ишетелде.

- Кемдәр ул? - тип һораны Солтанморат.

- Башҡорт малайҙары кадет корпусына уҡырға йыйылған. Шулар Рәсәй яугиры булырға өйрәнә.

- Эйе... - тип кенә ҡуйҙы Солтанморат һәм Ырымбурҙа туҡтап тормайынса, кире үҙ яғына ҡуҙғалды. Әммә юлы саҡ ҡына урауыраҡ булды килгәндекенән. Көйөргәҙе тигән һыу буйында Кинйә исемле бәләкәй генә ауылға һуғылды. Урамдағы беренсе өйҙөң ишеген ҡаҡты.

- Һаумыһығыҙ. Миңә Ғәтиәт тигән кешенең йортон табырға ине.

- Йорто уның ана ултыра. Тик үҙе юҡ. Француз яуына китеп, ҡайта алманы.

- Йортонда кем йәшәй һуң?

- Ҡатыны менән улы.

Солтанморат күрһәткән йортҡа инде.

- Мин һеҙгә ике аманат тапшырырға тейешмен, - тине ул үҙе менән таныштырғас. - Беренсеһе Ғәтиәт дуҫымдың үҙе мәрхүм булғансы түшендә йөрөткән көмөш миҙалы. Быны уға Рәсәй батшаһы исеменән Ватан һуғышында күрһәткән батырлығы өсөн генерал тапшырғайны. "Улыма күрһәтеп маҡтанырмын", - ти торғайны. Насип булманы. Кил, улым, һинең күкрәгеңә мин булһа ла тағайым.

Күлдәгенә ҡаҙалған миҙалды һыйпап, әллә кем булып китте малай. Шунан Солтанморат тоҡсайының төбөнән ҡат-ҡат сепрәккә төрнәлгән нәмә сығарҙы.

- Бынһы һинең ҡайныңдың,- тине ҡатынға ҡарап, - ә һинең ҡарттайың Кинйә Арыҫландың тарих китабы. Быны ул ғәрәптәр иленә хажға барған саҡта юлда яҙған. Башҡорт халҡының иң аҫыл тарихы. Минең атайҙың ағаһы һеҙҙең Кинйә Арыҫлан менән бергә хажға барған. Әммә инде ҡайтып еттек тигәндә Кинйә абыҙҙы батша шымсылары үлтергән. Ауылығыҙға ҡайтарып, мәйетен йәшереп күмгән саҡта минең бабай китапты һеҙгә ҡалдырмаған, шымсылар һеҙҙән уны тартып алыр, тип ҡурҡҡан. Бабайым уны ошо көнгәсә үҙендә йәшереп тотҡан. Минең Ырымбурға барырҙы белгәс, һеҙгә аманат итеп тапшырырға ҡушты.

- Һин уҡый беләһеңме? - тип һораны Солтанморат малайҙан.

- Беләм.

- Бик яҡшы. Әлегә уҡы. Форсаты сыҡҡас, китап итеп баҫтыртырһың. Хәҙер һеҙгә минең үтенесем бар: Кинйә Арыҫландың ҡәберен күрһәтегеҙ миңә.

Өйҙәгеләр шым булды ла ҡуйҙы. Аптыраған Солтанморат ҡатынға текләште.

- Минән шикләнәһеңме? Мине лә батша шымсыһылыр тиһеңме? Мин һинең ирең менән ике йыл буйы һуғышта йөрөнөм. Ул миңә Кинйә тураһында барыһын да һөйләп бөттө.

Ҡатын ауыр тын алды.

- Мин бисә кеше. Бисәләргә ҡәберлеккә барырға ярамай. Улым, бар, күрһәт.

- Һуң, әсәй, үҙең ҡарттайҙың ҡәберен бөрәүгә лә күһәтмә, өҫтөндә вәхшилек ҡыласаҡтар, тинең дә баһа.

- Был ағайға ышанырға ярай, шикелле.

Ауылдан йыраҡ ҡына бер туғайлыҡта ине ҡәбер. Белгән генә кеше күрһәтмәһә, табырлыҡ та түгел. Ер менән тигеҙләнгән, өҫтөнә үлән үҫеп бөткән, бер ҙур таш ҡына белгертеп тора. Солтанморат үҙе белгәнсә Ҡөрьән сүрәләрен уҡыны ла:

- Бығаса, Кинйә батыр, һинең ҡәбереңде ҡәҙерләй алманыҡ. Әммә һинең һәм һиңә тиклем булған бөйөктәребеҙҙең васыятын үтәй киләбеҙ. Наполеон һынлы Наполеонды теҙ сүктерҙек, әммә еребеҙҙе бирмәнек. Киләсәктә лә бирмәйәсәкбеҙ!- тип битен һыпырҙы.

Бығаса шым торған малай:

- Ҡарттайымдың ҡәберен үҙем йүнәтеп ҡуям. Ололар ғына рөхсәт итһен,- тине, тауышы ҡатҡылланып китте.

...Был саҡта Наполеон Бонапарт Эльба утрауында һөргөндә көн күрә ине.

* * *

1912 йылдың эҫе июнь көнө. Яйыҡ (Урал) йылғаһының киң кисеүенә ике яҡтан биш-алты атлы төркөм килеп төштө. Бер-береһен күрмәй ҙә, береһе икенсеһенә юл бирергә уйламай ҙа инеләр, шикелле. Әммә береһе лә икенсеһенең юлын быуманы. Һыуҙы шаптырлатып, кем нығыраҡ тауыш сығара тигән һымаҡ, аттарын ҡыуа инеләр, алдағы икәүҙең аттары башҡа-баш тиңләшкәс, береһе икенсеһенә ҡысҡырҙы:

- Бәй, Ҡыуат, был һин дә баһа. Ҡайҙа ҡабаландыраһың атыңды? Кисеүҙе шым ғына сыҡ. Барыбер һуңлаһың бит инде.

- Ә-ә, һинме ни, Айсыуаҡ? Белеп ҡуй, башҡорт дворяны Ҡыуат бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла һуңламай.

Айсыуаҡ тигәне "пырх" итеп көлөп ебәрҙе лә атының теҙгенен тартты. Менгеһе шундуҡ яйланы һәм һыу эсергә тотондо. Ҡаршы килгән аттың кинәнеп һыу эсә башлағанын күргән Ҡыуаттың аты ла ҡапыл туҡтаны һәм ирендәрен һыуға тыҡты.

- Башҡортта беренсе дворяндың кем икәнлеген, бәлки, һин белмәйһеңдер. Белмәһәң, бел, был дәрәжәгә беренсе булып Айсыуаҡов ағайың өлгәшкән һәм ул әле Ырымбур гөбөрнаторының йыйынынан эшен бөтөрөп, ҡайтып килә. Ә ҡайһы бер дворяндар унда тик китеп кенә бара.

- Төптө яңылышаһың, беренсе дворян. Ҡыуат атлы өлгөр кеше ҡаҙаҡ далаларына барып, император Николай Икенсе ҡушҡан дәүләт йомошон үтәп килә ята.

- Ниндәй дәүләт йомошо инде ул?

- Ғали йәнәптәребеҙ ҡаҙаҡ яғында йәшәгән башҡорттарҙы Ватан һуғышының йөҙ йыллығы менән ҡотларға шәхсән ҡушты.

- Ә ҡаҙаҡтарҙы ҡотламанымы?

- Улар бит һуғышта ҡатнашманы. Шуға уларға императорҙан сәләм тапшырҙым.

- Ә улар?

- Улар ҡайтарып сәләм әйтте һәм башҡорт туғандарын йөҙ йыллыҡ менән ҡотланы. Ә һеҙ олатай-ҡартатайҙарға тейеш миҙалдарҙы тағып, ҡыуанышып ҡайтып бараһығыҙмы?

- Ҡыуанып һәм ғорурланып. Ватан һуғышына урыҫтан башҡа башҡорт ҡына шул тиклем күп яугир биргән һәм улар барыһы ла бурысын иң юғары кимәлдә үтәгән, тип әйтте бөгөн гөбөрнатор Рәсәй батшаһы исеменән.

- Ура! - Ҡыуатов һауаны яңғыратты һәм ҡапма-ҡаршы килгән һыбайлыларҙың һәр ҡайһыһы үҙ юлын дауам итте.

**(Аҙағы. Башы 17-19-се һандарҙа).**



**Ғәлим ХИСАМОВ**

# ПАРИЖДА

**(Романдан өҙөктәр)**

***Быйыл Рәсәй Федерацияһы 1812 йылдағы Ватан һуғышына 210 йыл тулыуҙы билдәләйәсәк. Шул айҡанлы яҙыусыбыҙ Ғәлим Хисамов "Француз яуы" тип исемләнгән роман яҙҙы. Иғтибарығыҙға ошо әҫәрҙән өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.***

ЗАУЫҠ

*Фирүзә АБДУЛЛИНА*



# БАХЫР МЕНӘН ЯРЫШЫП БАТЫР БУЛМА,

## Батыр менән ярышып батыр бул!

### Ирҙәргә - ҡатындарҙан

Үҙ- үҙемде маҡтамайым,
Мин фәрештә түгел, беләм,
Әммә ошо холҡом менән
Һиңә ярап йәшәп киләм.

Күп мыжымай, ипләп кенә
Кисерәм бар ғәйебеңде,
Өҫтөң таҙа, ашың тәмле,
Ҡалғаны - үҙ мәйелеңдә.

Халыҡ алдына данынды
Сығармайым, үҙем "йотам",
Һорамайым наҙ, йылы һүҙ -
Ғүмер буйы сабыр көтәм.

Сағыштырып әллә кемгә,
Уйлайһыңдыр - бына бәхет!
Һин әлегә аңламайһың -
Ошо көнөң - үҙе тәхет!

Ҡәҙерен бел бергә саҡтың,
Был бәхет бит мәңге түгел,
Ҡырыҫ-мырыҫ ҡарашыңдан
Кителмәһен минең күңел.

Мин - ҡулдағы сәпсек кенә,
Торна булам, ҡулға алһаң.
Ер-һыу илар көнөң килер,
Минән яҙып, минһеҙ ҡалһаң.

Үҙ ҡатының - бахыр баҡыр,
Сит ҡатындар - гәүһәр, алтын...
...Үҙ аламаһына ғына
Күнә бит ул һәр бер ҡатын!

Һин ымһынма башҡаларҙың
Күҙ-ҡашына, буй-биленә -
Тик һыйырҙы ғына кеше
Һайлай, ҡарап елененә.

Тик юртаҡты һайлай кеше,
Ҡарап буй-һын, тояғына,
Ә һөйгәнде - йөрәк таба,
Ул һайламай. Тоя ғына.

Сайҡалдырма, әлегәсә
Тигеҙ бара беҙҙең карап,
Бәлки, кемдер көнләшәләр,
Һиңә, ситтән генә ҡарап.

### Хәләлемә

Һиңә ниндәй кәрәк - мин шундай:
Һин һағышлы булһаң - мин моңдай,
Һиңә һалҡын булһа, мин тундай,
Яланаяҡ булһаң, мин ҡомдай.

Әгәр сарсап кипһәң - һыу булам,
Дошмандарың өсөн ыу булам,
Ҡараңғылыҡ баҫһа, нур булам,
Күңелеңдә арбар йыр булам!

Өндәшмәһәң, мин дә һын ғына,
Сабыр итә алам тын ғына,
Етә миңә бары ым ғына,
Һин - ҡылысһың. Ә мин - ҡын ғына.

Берсә йомшаҡ, берсә ҡатымын,
Берсә баҡыр, берсә алтынмын,
Нурҙан, йырҙан торған ҡатынмын,
Нисек бармын - һинең ҡатынын,
Бар булмышым - һинең яртыңмын.

### Балама

Ҡартайырмын, балам...
Ҡарайырмын.
Аҡ ҡылғандай булыр сәстәрем.
Һин онотма: бар ғүмерем буйы
Һинең хаҡта булды хәстәрем.

Буталырмын, балам. Һөйләгәнем
Дөрөҫ кенә булмаҫ ҡайһы саҡ...
Һине һөйләшергә өйрәткәндә
Асыҡ булды һиңә был ҡосаҡ.

Йәмһеҙләнһәм, йыйырсыҡтар баҫһа,
Йырлап ҡуйма, балам, сит йырҙы:
Һин оялма минең ҡартлығымдан -
Үҫтергәнмен бит һин матурҙы!

Бирешермен, балам. Үҙ-үҙемде
Ҡарарға ла хәлем етмәһә,
Риза булып ҡына тәрбиәлә,
Һине үҫтергәнде иҫлә лә.

Ҡартайһам дә, әсәң булып ҡалам,
Хистәреңде бер үк ойотма!
Ни күрһәтһәң, шуны берәй ҡасан
Үҙең күреүең бар, онотма.

### Илемә

Гүзәллеген йырға һалмаһам да,
Ҡурсаланым ғүмер буйына,
Минең өлөшөм дә ингән бит ул
Тәбиғәттең хозур туйына!

Иң шәп эшсе, беләм, мин түгел, тик
Башҡа илгә хеҙмәт итмәнем,
Тубыҡланып ерҙе үпмәһәм дә,
Үҙ еремде ташлап китмәнем!

Илде яҡлап яуға сапҡаным юҡ,
Дошман ҡыйратырға яҙманы,
Ләкин йәнем-тәнем ошо ерҙә -
Сит тарафҡа күңелем аҙманы.

Тамаҡ ярып, оран һалмаһам да,
Минең өсөн ул бер - аңлайым,
Минһеҙ, беләм, илем йәшәй ала,
Тик мин унһыҙ йәшәй алмайым!

### Батыр бул!

Яраталар беҙҙә бахырҙарҙы,
Бахырҙарҙы беҙҙә йәлләйҙәр,
Шуға, ахыры, һау-сәләмәттәр ҙә
Зарланырға сәбәп эҙләйҙәр.

Яратмайҙар беҙҙә батырҙарҙы,
Батырҙарҙан гәйеп эҙләйҙәр,
Батырҙарға күптәр аяҡ сала,
Йәки ситтән генә күҙләйҙәр.

Бахырҙарға юлдар иркен, таҡыр,
Ябып тора гелән йәшел ут,
Батырҙарға йәшәү ауыр, ләкин
Улар менән илдә бәхет, ҡот.

Тик батырҙар менән донъя матур!
Әйҙә, эйәр! Улар һуҙыр ҡул!
Бахыр менән ярышып батыр булма,
Батыр менән ярышып батыр бул!
Батыр менән йәнәш баҫыр бул!

### Өлгөрөп ҡал

Эй ҡыуабыҙ был донъяны,
Ваҡыт үтә, ваҡыт етмәй!
Һиҙҙермәйсә йылдар үтә,
Ғүмер үтә, ғүмер көтмәй.

Осрашырға өлгөрмәйбеҙ,
Айҙар үтә, йылдар үтә,
Һөйләшеп тә туялмаҫлыҡ
Яҡындар был ерҙән китә.

Һуңғы тапҡыр ҡасан булдың
Тыуған йорттоң ҡосағында?
Ҡайтып әйлән һине көткән
Яҡындарың бар сағында.

Бер-бер артлы китәләр шул,
Күптәр хәҙер теге ярҙа,
Ҡосаҡлап ҡал яҡыныңды,
Ҡосаҡларлыҡ кешең барҙа.

Һинән шылтыратыу көткән
Кешеләрең иҫән саҡта,
Шылтыратып хәлен белеш -
Онотма һис ошо хаҡта!

Барып әйлән, хәлен белеш,
Телефондан хат яҙып һал,
Бөгөн барбыҙ, иртәгә - юҡ,
Өлгөрөп ҡал! Өлгөрөп ҡал...

### Шулай тейеш!

Мин баламды яратҡандай
Яратмаҫ мине балам -
Шулай инде... Шулай тейеш!
Аңлайым, тыныс ҡалам.

Миңә лә атай-әсәйҙән
Балам бит ҡәҙерлерәк,
Үҙем тыуҙырған сабыйым,
Ҡартлыҡ көнөмә терәк.

Йөрәгемдең бөтә көсөн,
Йәнемдең барлыҡ наҙын
Биреп үҫтергән баламдан
Ҡәҙерле ни бар тағын?

Балам да бала үҫтерә,
Биреп бар мөхәббәтен,
Һаҡлап бәлә-ҡазаларҙан,
Аямай йәнен-тәнен.

Шулай булған. Шулай булыр.
Бауыр иткәйем - балам,
Әсәйем шулай тигәндер,
Минән балама ҡалған.

Атай-әсәй ҡәҙерле, тик
Ғәзизерәк үҙ балаң.
Һис үпкәм юҡ. Шулай тейеш,
Ғәҙел генә уйлаһаң...

### Үтенес

Донъяның бар эшен
Эшләп өлгөрөргә
Хәлем етмәй. Туҡтап тын алам.
Кеше араһында
Ҡәм-хур булмай ғына
Йәшәп үтерлек көс бир, Аллам!

Илдә барған хәлдәр
Быуыныма төшә,
Ҡурҡып китәм, ҡайсаҡ таң ҡалам.
Килер ҡартлығымда
Лайыҡлы йәшәрлек
Башлыҡтарға намыҫ бир, Аллам!

Донъя беҙҙән китә,
Балаларға күсә.
Уйлайым да иркен тын алам...
Ғәзиз балаларым
Үҙ мәрхәмәтенән
Ташламаҫлыҡ иман бир, Аллам!

Йәшәп үткән тиклем
Инде йәшәп булмаҫ,
Матур йәшәлгән тип шатланам.
Үҙ аҡылым менән,
Үҙ аяғым менән
Ахырҙарға еткер, эй, Аллам!

### Йыуаныс

Өндәшмәйһең. Мин дә өндәшмәйем.
Һөйләшерлек һүҙ ҙә юҡ кеүек.
Нимәгә буш һүҙҙәр? Беҙ былай ҙа
Күптән инде ян һәм үк кеүек.

Күптән инде - ишәй менән ҡушай,
Силәгенә күрә ҡапҡасы,
Өйрәнелгән. Ләкин... ҡулдарымды
Үҙ ҡулдарың менән ҡапласы?

Мин оноттом, ҡасан һуңғы тапҡыр
Иңдәремдән ҡостоң яратып?
Һуңғы тапҡыр ҡасан йылмайҙың һин,
Күңелемдән томан таратып?

Иҫләмәйем инде. Ләкин беләм:
Күп һүҙ - буш һүҙ. Күңел йыуатам:
Барыбер һин мине яратаһың.
Барыбер мин һине яратам.

### Раббым үҙе яҡлаһын!

Бәхетһеҙмен тип һин яр һалмай тор -
Яр һалырлыҡ әле тауышың бар,
Ярлымын тип әле зарланмай тор -
Аҙмы - күпме килер табышың бар.

Янғыҙмын тип бәлә һалыу - гонаһ -
Эргә-тирәң тулы дуҫ-туғаның,
Балаһы бар кеше яңғыҙ булмай,
Үҙ тәрбиәң - ул бит һинең ҡаның.

Әллә кемдәр әллә ҡайҙан килеп
Низер эшләр тимә һинең өсөн,
Табып әмәл, ҡылып төрлө гәмәл
Эшкә егеү кәрәк йәшәү көсөн.

Бар донъяға рәнйеп, үпкәләмә,
Ил күргәнде булмаҫ күрмәйенсә,
Яҡты донъяларҙан биҙмәү зарур
Ҡараңғы тар гүргә кермәйенсә.

Сабырлыҡтар өсөн баһа итеп
Фәрештәләр беҙҙе һаҡлаһын,
Хаким, ҡанун беҙҙе ҡаҡҡанда ла,
Бер Хоҙай Тәғәләм ҡаҡмаһын!
Раббым беҙҙе үҙе яҡлаһын!

### Аңламайым

Яратманың. Ҡосаҡ-ҡосаҡ итеп
Раузаларҙы бүләк итмәнең.
Исемемә йырҙар сығарманың,
Йөрөгән эҙҙәремде үпмәнең.

Ҡулдарыңда ғына йөрөтмәнең,
Матур һүҙҙәреңде әйтмәнең,
Мәңгелеккә һөйөү вәғәҙәләп,
Йондоҙҙарҙы бүләк итмәнең.

Йәнәш булдың. Мыжығыма түҙҙең.
Ышыҡланың елдән, буранан,
Мин тотондом һиңә, таймаҫ өсөн,
Бергә атлағанда урамдан.

Сирләгәндә һин янымда булдың,
Ауыр саҡта ташлап китмәнең.
Миңә кәрәк ине матур һүҙҙәр,
Һин уларҙы барыбер әйтмәнең...

Игтибарлы, ихтирамлы булдың,
Тик юлыма гөлдәр теҙмәнең,
Мең гәмәлең менән иҫбатлап та,
Бер һүҙеңде әйтә белмәнең,

Миңә ошо һүҙең етмәй ҡалды,
Үкенескә ҡалды үткәнем...
...Аңламайым, нишләп бер ҡасан да
"Яратам", - тип миңә әйтмәнең?..

✓ *Заманалар алышынып торһа ла, улар төп шөғөлдәренә хыянат итмәгән, сөнки шәл уларҙы туйындырған да, кейендергән дә, уҡытҡан да, туйҙар үткәрергә лә ярҙам иткән килем сығанағы булған.*

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺУТТА ЛА ШӘКӘР БАР

Глазго университеты ғалимдары популяр эсемлектәргә анализ үткәргән. Асыҡланыуынса, уларҙың күбеһендә шәкәр күләме норманан юғарыраҡ. 2005 кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, күптәр татлы газлы эсемлектәрҙә шәкәр күплеген белһә лә, һөт һәм башҡа коктейлдәрҙә, энергетик эсемлектәрҙә һәм емеш-еләк һуттарында шәкәрҙең шулай уҡ юғары күләмдә булыуын бөтөнләй белмәй. Мәҫәлән, барыһы ла файҙалы тип иҫәпләгән анар (гранат) һутында шоколадлы һөт коктейленә йәки емеш-еләк һутына ҡарағанда шәкәр 1,5 тапҡырға артығыраҡ. Һуңғы осорҙа һимереү сиренең артыуы тап шәкәрле эсемлектәр ҡулланыу менән бәйле, ти ғалимдар. Был ҡан баҫымының күтәрелеүенә, шәкәр диабетына, йөрәк сирҙәренә, инсультҡа килтерә.

■ Бөйөк Британияла үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, был илдә йәшәүсе һәр дүртенсе ҡатын-ҡыҙ интернет ярҙамында үҙенә диагноз ҡуя һәм үҙаллы дауалана икән. Яңылыш диагноз ҡуйыу һөҙөмтәһендә улар файҙаһы теймәгән дарыуҙар һатып ала, йыш ҡына был дарыуҙар кире һөҙөмтәгә килтерә. Ғалимдар әйтеүенсә, зыян күргәндән һуң гүзәл заттарҙы ауырыуҙан ғына түгел, үҙаллы дауаланыуҙың эҙемтәләренән дә дауаларға тура килә. Һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, һәр унынсы ҡатын-ҡыҙ үҙенең сәләмәтленә ҡағылышлы проблемаларын ғаилә ағзалары менән бүлешмәй. Ә һәр егерменсе ҡатын-ҡыҙ: "Ауырыу үҙе үтер әле", - тип, медицина ярҙамына йылдан ашыу мөрәжәғәт итмәй йөрөй. Британия ҡатын-ҡыҙҙары үҙаллы дауаларға маташҡан иң йыш осраған билдәләргә йоҡо боҙолоуы, баш ауыртыуы, депрессия, мускулдар ауыртыуы, арыу инә.

■ Күптәр "ҡоро күҙ" синдромы менән яфалана. Был сир ваҡытында күҙҙәр әсетә, яҡтыға ҡарап булмай, тиҙ арый. Токио университетының медицина мәктәбе тикшеренеүселәре уны ҡәһүә ярҙамында дауаларға тәҡдим итә. Билдәле булыуынса, кофеин төкөрөк һәм ашҡаҙан һуттары бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, ул шулай уҡ күҙ йәше биҙе эшмәкәрлеген әүҙемләштерә. Был мәғлүмәтте Япония ғалимдары 78 оло кешелә тикшереп ҡараған. Уларҙың береһе лә "ҡоро күҙ" синдромы, глаукома һәм башҡа күҙ ауырыуҙары менән ауырымаған. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, кофеин был ауырыуҙарҙы булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Буффало һәм Калифорния университеттары тикшеренеүселәре иҫәпләүенсә, ҡайһы бер кешеләрҙең башҡаларға ҡарағанда йомартыраҡ һәм игелеклерәк булыуында уларҙың гендары "ғәйепле". Ғалимдар ике гормон: "бәхет гормоны" - окситоцин һәм агрессияны яйлаусы вазопрессин кимәлен тикшереп ҡараған. Кемдә был ике гормон юғарыраҡ, улар ҡағиҙә булараҡ, бик йомарт һәм киң күңелле була. Шулай итеп, агрессияны, һаранлыҡты, тиҙ ҡыҙып барыусанлыҡты кешенең ДНК үҙенсәлегенә һылтарға мөмкин, ти ғалимдар.

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көй тыңлау хәүеф тойғоһон һәм депрессияны кәметә, кәйефте яҡшырта һәм баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәрен уята. Әммә Америка ғалимдары билдәләүенсә, эш эшләгән ваҡытта яратҡан көйөндө тыңлау эштең сифатына кире йоғонто яһай икән. Неврологтар көй һәм тауыштарҙың мейе функцияларына тәьҫирен тикшереп, тулы тынлыҡта ғына мейенең яҡшыраҡ эшләй алыуын асыҡлаған.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# УҠЫРҒА НИӘТ ИТЕГЕҘ,

## ниәт хыялдарҙы тормошҡа ашыра

**Сибай институты тигән һүҙбәйләнеш йәшәмеш булып сыҡты, ялан уртаһында ҡалҡты ла, ышаныслы аҙымдар менән алға ынтылды. Киләсәктә лә йәшәр, сөнки был йорттоң ниәте изге, булмышы ныҡлы, үтәгән миссияһы бик тә юғары - милли кадрҙар әҙерләй ул. Юғары уҡыу йортоноң бөгөнгө тын алышын тойор өсөн Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты директоры Илдар Сәлихйән улы Хәмитовҡа мөрәжәғәт иттек. Ул белем һәм тәрбиә (эйе, тәрбиә лә, сөнки онотола барған был халәт тә хас юғары уҡыу йортона) усағының тормошо тураһында ҡыҫҡаса һөйләгәндән һуң тәртәне технология факультеты уҡытыусылары Вәлиев Азат Сәлимйән улы (технология факультеты деканы, техник фәндәр кандидаты, педагогия фәндәре докторы) менән Мусин Шәһит Ришат улы (педагогия фәндәре кандидаты, доцент) яғына борҙо. Улар менән дә һөйләштек. Фекерҙәш шәхестәр эргәһендә булып, уларҙы тыңлап, йылы хистәр уянды СиБДУ тураһында.**



***Илдар Сәлихйән улы:*** Сибай ҡалаһы һәм Урал аръяғы райондары хакимиәттәре башлыҡтарының республиканың тәүге Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовҡа Сибай ҡалаһында юғары уҡыу йорто асыу тураһында мөрәжәғәт итеүенә утыҙ ике йыл ваҡыт үтеп тә киткән. Башта педагогия институтының филиалы булараҡ асылған уҡыу йорто 1992 йылда Башҡорт дәүләт университетының филиалына әйләнде. Шунан бирле ун дүрт меңдән ашыу студент ошо юғары уҡыу йортонда белем алды. Уларҙың күбеһе Урал аръяғы райондарыныҡы.

Республика буйынса һәм сит өлкәләргә таралды Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтын тамамлаусылар, уҡыу йорто иһә ҙур белем биреү фәнни үҙәгенә әйләнде. Юғары белемле һөнәр кешеләренә ихтыяж элек көслөрәк ине, әле лә кәмемәй. Йыл да февралдән үк мәғариф бүлектәре, полиция хеҙмәте органдары, суд приставтары, банктар шылтыратып белешә башлайҙар. Иҡтисадсылар бар, ә бына юристар етешмәй, тиҙәр. Уҡытыусылар тураһында әйтеп тораһы ла түгел: һәр районға хәҙерҙән үк егермешәр уҡытыусы талап ителеүе, әле эшләп йөрөгән уҡытыусыларҙың алтмышлап проценты пенсия йәшенә етеп килеүе тураһындағы мәғлүмәтте беләбеҙ. Шуға ла беҙгә директорҙар шәхсән үҙҙәре мөрәжәғәт итә, район мәғариф бүлектәре етәкселәре килеп, сығарылыш курс студенттары менән ҡыҙыҡһына. Февраль-март айҙарында уҡ һуңғы курс студенттарына эш урыны билдәле була. Егеттәрҙең

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# КИС УЛТЫРЫП...

## шәлдәр бәйләй самаҙылар

**Һеҙҙең тарафтарҙа кис ултырыуҙар бармы? Ә бына минең тыуған яғым Ейәнсура районы Самаҙы ауылында әле булһа был матур йола йәшәй.**



Үҙ булмыштарына тоғро ҡалып, нәҫелдән күсә килгән төп һөнәрҙәренең береһе булған шәл бәйләү шөғөлөн дауам итә ауылым уңғанбикәләре. Заманалар алышынып торһа ла, улар төп шөғөлдәренә хыянат итмәгән, сөнки шәл уларҙы туйындырған да, кейендергән дә, уҡытҡан да, туйҙар үткәрергә лә ярҙам иткән килем сығанағы булған.

Улай ғына ла түгел, дебет менән булышыу уларҙың ҡандарына һеңгән күңел талабы һәм яңғыҙың ултырғанда күңелһеҙ уйҙарҙы теткеләп ташлап, бер епкә теҙеү ысулы ла, күмәкләшеп кис ултырып, фекер алышыу өсөн бер сара ла булып тора. Тап шуға ла Ейәнсура килендәре бер ваҡытта ла ҡул ҡаушырып ултырмай: телевизор ҡараймы, күршеһенә хәл белешергә инәме - уларҙың бәйләме ҡулдарында була. Ә дебет эшенең ни тиклем көс, таһыллыҡ, һәләт, сослоҡ, тапҡырлыҡ, зауыҡ талап иткәнен һөнәрмәндәр үҙҙәре генә белә. Кәзә дебетенең сифатын да, үлсәмен дә улар бер күҙ һалыуҙа билдәләй, ә шәлгә биҙәк һалып бәйләүҙәре уларҙың күңелендә тыуған тотош ижад балҡышы. Дебетте аялаһындармы, орсоҡто зыр килтереп еп иләһендәрме, йә энә тотоп, бәйләм бәйләһендәрме - ҡулдарына күҙ эйәрмәй, телдәрендә шаяртыу, ә йөҙҙәрендә үҙ эштәренән ҡәнәғәтлек кисереше.

Ҡатын-ҡыҙҙың тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ эшенән ваҡыт, көс-хәл табып кис ултырыуға килгән был гүзәл заттар арыуталыуҙы беләме икән, әллә донъяуи мәшәҡәттән ошо шөғөлдәре арҡылы арыналармы икән? Һәр хәлдә, халҡыбыҙҙың төрлө йолалары менән бер рәттән, шәл өмәһен дауам итеүсе ауылым уңғандарына дан, тип, һоҡланам да, ғорурланам да. Ауылыбыҙҙың ҡотон арттырыусы, йәшәйешенә йән өрөүсе апайҙарым, еңгәйҙәрем, инәйҙәрем бит улар минең. Ҡулығыҙҙан һөйөнөгөҙ, һау-сәләмәт кенә булығыҙ. Белгәндәрегеҙҙе киләсәк быуынға өйрәтеп ҡалдырыу һеҙҙән бурыс - шул теләгем.

**Динара ҠОТЛОБАЕВА.**

күбеһе, әлбиттә, әрме сафына алына, ҡалған утыҙлап проценты уҡыуҙарын магистратурала, аспирантурала, йәки икенсе юғары уҡыу йорттарында дауам итә. Ә ихтыяж бик ҙур. Ике меңдән ашыу студенттың 20-25 проценты Сибайҙан, ҡалғандарҙың күпселеге Урал аръяғы районларынан. Һан буйынса беренсе урында, әлбиттә, Сибай ҡалаһы менән Баймаҡ районы, шунан Хәйбулла, Әбйәлил, Йылайыр, Бөрйән районлары килә. Хатта Өфөнән дә бар студенттарыбыҙ. Технологик факультетта нефть һәм газ табыу буйынса инженерҙар әҙерләү йүнәлешен булдырғас, Себерҙән килеп уҡый башланылар. Магнитогорск ҡалаһында университет ябылғандан һуң беҙгә уҡырға килеүселәр һаны тағы ла артты.

Абитуриенттар өсөн конкурс элекке һымаҡ түгел, әлбиттә. Элек бит бер урынға ун кеше дәғүә итә ине, әле бер бюджет урынына икеөс кеше тура килә. Беҙҙең студенттарҙың 30-40 проценты өсөнсөдүртенсе курстан уҡ эш башлай, сөнки закон студенттарға мәктәптә эшләргә рөхсәт итә. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, буласаҡ уҡытыусылар диплом алалар ҙа мәктәптән китәләр, сөнки эш хаҡын күтәрер өсөн юғарыраҡ категория, ваҡыт кәрәк. Шулай итеп, уҡып сыҡҡандарҙың яртыһы ғына мәктәпкә бара, ҡалғандары икенсе эш эҙләй. Беҙ, әлбиттә, уларҙың ҡайҙа эшкә урынлашҡанын күҙәтәбеҙ. Эшкә төшмәһәләр, йә урын таба алмаһалар, ярҙам итәбеҙ, район хакимиәттәренә бәйләнешкә сығабыҙ, эргәләге предприятиеларға шылтыратабыҙ.

Институт милли кадрҙар әҙерләү буйынса ҙур эш аткара, студенттарыбыҙҙың 80 проценты, ситтән тороп уҡыусыларҙың 60 проценты - башҡорттар. Беҙҙең уҡыу йортон тамамлаусыларҙың күптәре бөгөнгө көндә етәксе урындарҙа эшләй. Һәр ауыл һайын тиерлек - беҙҙең белгестәр. Күп кенә район башлыҡтары юғары белемде беҙҙә алған. Был үҙе ҙур күрһәткес! Милли үҙенсәлегебеҙ уҡыу йортоноң ишек алдынан уҡ башлана: билдәле шәхестәребеҙгә ҡуйылған бюстар, стеналарҙағы халҡыбыҙҙың тарихи ваҡиғаларына бәйле барельефтар үҙҙәре үк тәрбиәүи сара булып тора. Әлбиттә, башҡорт теле дәрестәренә ҙур иғтибар бүләбеҙ. Мәҫәлән, Федераль дәүләт стандарттарына ярашлы программаларҙың 50 проценты юғарынан төшөрөлә, ҡалғанын һайлау мөмкинлегенә эйәбеҙ. Мәҙәни яҡтан үҫешеүгә лә иғтибар юғары: ике бейеү ансамблебеҙ бар, ҡурайсылар, йырсылар - бөтәһе лә бар беҙҙә.

***Азат Сәлимйән улы:*** Институттың тәбиғи-техник факультеты икегә - тәбиғи-математик һәм технология факультеттарына бүленде. Элек инженерҙар әҙерләмәй торғайныҡ, элек был һөнәргә эйә булыу өсөн Силәбелә уҡый торғайнылар. Бөгөн иһә инженер һөнәренә ихтыяж ныҡ артыуын иҫәпкә алып, һөнәрҙәр исемлеген ҡарап, автомобилдәр сервисы буйынса инженерҙар уҡыта башланыҡ. Ваҡыт үтә килә был һөнәр буйынса кадрҙар күбәйеүе һиҙелә башланы. Шунан беҙ нефть табыу ҡоролмалары транспорты сервисы буйынса икенсе йүнәлешкә күстек. Урал аръяғы районларынан күпләп Себергә китеүҙәрен иҫәпкә алып, яңы йүнәлеш һайлап, дөрөҫ эшләгәнбеҙ, тип уйлайым. Һөҙөмтәләр оҙаҡ көттөрмәне: 2021 йылда ситтән тороп уҡыуға 122 студент ҡабул иттек. Уларҙың күпселеге Себерҙә эшләп йөрөүселәр иҫәбенән булды, сөнки беҙҙә уҡыу хаҡы сағыштырмаса түбәнерәк. Мониторинг буйынса беҙҙә юғары белем алыусылар иң юғары квалификацияға эйә булыусылар иҫәбенә инә. Был беҙҙең өсөн бик һәйбәт күрһәткес. Киләһе 2023 йылға институтҡа 16 бюджет урыны бирелә. Конкурс ҙур булыр тип уйлайбыҙ, сөнки беҙҙең институт тураһында ситтән тороп уҡыусылар буйынса хатта Якутияла, Магадан, Приморье, Красноярск крайҙарында ла беләләр. Нефть табыусы компаниялар өсөн юғары белемле белгестәр бик күп кәрәк, әле беҙҙә ситтән тороп уҡыусы 25 кеше нефтселәр сафынан килгән студенттар. Элек беҙ Силәбе юлын тапаһаҡ, хәҙер улар үҙҙәре беҙгә күпләп киләләр, сөнки башҡа юғары уҡыу йорттары менән сағыштырғанда, беҙҙең матди-техник базабыҙ бик һәйбәт. Өлгәшелгәндәрҙә туҡтап ҡалыу уйы юҡ, киреһенсә, яңы лабораториялар төҙөйбеҙ, эште дауам итәбеҙ.

***Шәһит Ришат улы:*** Бөгөнгө көндә уҡытыу өсөн техник мөмкинлектәр кинерәк, мультимедия, интернет ярҙамында бик күп мәғлүмәт тупларға була. Хәҙер студент китап эҙләп ҡаңғырмай. Элек бит китаптарҙы, киләсәктә кәрәк була, тип, алдан һатып алып йыйып бара инек, сөнки интернет хыялда ла юҡ ине. Әммә эсте бошорған күренеш тә бар: студенттар бер-береһе менән һөйләшеп, аралашып бармай, улар телефонға тексәйәләр ҙә, хатта эргәһендәге кеше менән дә телефон аша аралашалар - һәр береһе үҙ виртуаль донъяһында йәшәй. Шуның арҡаһында логик фекерләү ҡеүәһе кәмей. Уйлай белмәйҙәр. Уйларға ла теләмәйҙәр, сөнки интернет әҙер материал бирә. Беҙ бит тырышып уҡый торғайныҡ, белемде китапханаларҙа туплай инек: мәғлүмәтте лә, белемде лә эҙләп ала торғайныҡ.

Институтта тәрбиә эше көслө ҡуйылған. Төрлө тәрбиәүи саралар йыш үтеп тора, уларға йәштәрҙе етәкләп тигәндәй алып йөрөйбеҙ. Дөйөм ятаҡҡа барабыҙ, тәртип, таҙалыҡты тикшерәбеҙ. Ата-әсәләр йыйылыштары үтеп тора, улар үҙҙәре лә ҡыҙыҡһынып, йыш килеп торалар. Спорт менән шөғөлләнеү өсөн дә яҡшы шарттар булдырылған, был яҡтан мөмкинлектәр күп, дөрөҫөн әйткәндә, тәртип боҙоуға ваҡыттары ла ҡалмай. Тағы бер ыңғай күренеш: студенттарҙың яртыһынан күбеһе беҙгә килгәнсе урта профессиональ белем алып өлгөргән, тәүге тәрбиәне колледждарҙа алғандар, өйҙән ситтә йәшәп өйрәнгәндәр, бөтәһе лә 11 кластан килһәләр, ауырға тура килер ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әле мәктәпте тамамлаусыларҙың, артабан ҡайҙа уҡырға, тигән уйға уйыларға ваҡыттары ла юҡтыр. Алдағы имтихандарға әҙерләнеп, баштары ҡатып йөрөгән саҡтары. Бәлки, ошо мәҡәләне уҡып, бер аҙ күңелдәре асылып, ниәтләнеп китерҙәр - өмөт йөрөтә, ниәт уйҙы тормошҡа ашыра.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН әңгәмәләште.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Алда көткән байлыҡ формалары

Бынан алда яҙған һуңғы аффирмация универсаль һәм һәр кемгә лә файҙалы. Булдырыуҙа ҡатнашыусы ролен башҡарыу - байлыҡҡа эйә булыуҙың дөйөм бүлеүсеһе. Байлыҡ һеҙгә төрлө формаларҙа килеүе мөмкин.

Джон Хирес көйәрмән була. Ул үҙ ҡалаһында булған бейсбол матчтарын ҡарап ҡына ҡалмай, икенсе ҡалаларға ла йөрөй. Ул брокер конторалыһында эшләй. Сираттағы тапҡыр етәксеһенә инеп, бер туғанын ерләргә ҡайтырға кәрәклеген белдергәс, начальнигы башын ғына сайҡап ҡуя - хәлен уртаҡлашыуҙан түгел, ә уны бары тик шундай тиҙлек менән туғандарын ерләгән Джон аптырата. Эшенә килгәндә инде, был өлкәлә Джон һәм уның клиенттары торғонлоҡ кисерә. Ваҡыт менән етәксеһе уға идеялар бирә, Интернеттың яңы ҡаҙаныштары менән танышырға йәки аэрокосмик компаниялар менән эш башларға тәҡдим итә. Джон был тәҡдимдәрҙе ҡыуанып ҡаршы ала, әммә һуңынан барыбер бөтөн иғтибарын командаларҙың юғары лигала нисек урынлашыуына йүнәлтә.

Сираттағы тапҡыр "туғанын ерләргә" ҡайтырға булғас, етәксеһе Джонға психотерапевҡа күренергә ҡуша. Психотерапевт гипноз менән дауалай һәм Джонға бейсболға ҡаршы, уның урынын алырҙай икенсе төрлө ыңғай көйләү бирә. Шуларҙың береһе "Һин эшеңдән ҡәнәғәтлек алаһың, тәжрибәңде, белемеңде һәм интуицияңды үҙеңә һәм башҡаларға файҙа килтереүгә йүнәлтә башлайһың" тигән көйләү була. Джон эшенә күберәк иғтибар бүлә башлай, шуның менән бергә уның средстволарҙы инвестициялауҙың ижади ысулдарына иғтибары арта. Ул һәм уның клиенттары гәмәлдә байый, ғаиләләге мөнәсәбәттәре йылына.

Ваҡыты еткәс, байлыҡ беҙгә төрлө формаларҙа килә. Һеҙҙең ваҡытығыҙ еткән. Ижадсы һеҙгә ҙур кредит бирергә әҙер. Бен Франклиндың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ: "Олоғая барған һайын мин был хәҡиҡәттең инандырырлыҡ дәлилдәрен күрҙем. Аллаһы Тәғәлә ысынлап та кешеләрҙең гәмәлдәре менән идара итә, әгәр уның теләгенән башҡа хатта турғай ҙа ергә төшмәй икән, уның ҡатнашлығынан тыш тотош империяның сәскә атыуы мөмкинме?"

**Аҡса килеүҙе нисек көсәйтергә?**

Ижади өндәге төш һәр саҡ емешле. Хәҙер һеҙгә, аҡсағыҙ бар һәм һеҙ улар ярҙамында хыялдарығыҙҙы тормошҡа ашыраһығыҙ, тип күҙаллау файҙаға буласаҡ.

- Унайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм үҙегеҙҙе гәҙәттә финанс эштәре менән булған урынығыҙҙа (өйҙә йәки эштә) тип күҙаллағыҙ.
- Банкка иғәнә индерергә әҙерләнәһегеҙ тип уйлағыҙ. Һеҙ дәртле һәм көс-ҡеүәтегеҙ ташып тора. Бер нисә секундҡа ошо тойғоларҙа туҡталып, уларҙы тойоғоҙ.
- Уйҙан ғына: "Мин Илаһты миңә байлыҡ биреүе өсөн яратам һәм Булдырыуҙың ҡатнашыусыһы ролен намыҫ менән башҡарам", - тиегеҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.

Был күрһәтмәне бер нисә тапҡыр уҡығыҙ һәм һуңғы аффирмацияны яҡшы итеп хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Күнекмәне ҡабатлағыҙ.

**Роберт СТОУН.**

**(Дауамы бар).**

*БЫЛ ҠЫҘЫҠ!*



# ИҢ ЙӘШ УЙЛАП ТАБЫУСЫЛАР

**Балалар донъяны үҙҙәренсә аса һәм уға үҙҙәренең яңылыҡтарын индерә. Күп балалар өлкәндәргә ҡарағанда зирәклеге, уйлап эш итеүе менән ғәжәпкә ҡалдыра. Нимәнелер уйлап сығарыу һәләте, фекерҙәренең ҡалыплашып, ҡатып ҡалмауы бала кешене асыштарға алып килә, тормошобоҙҙо яҡшыртыуға, камиллаштырыуға хеҙмәт итә. Күптәр файҙалана уларҙың асышы менән, бала кеше уйлап тапҡан икән, тигән уй хатта башҡа ла килмәй. Ҡайһы берҙәре менән таныштырыу бөгөн маҡсатыбыҙ. Бәлки, беҙҙең арала ла йәмғиәт үҫешен яҡшыртыуға өлөш индереүсе шундай балалар йәшәп яталыр?**

## Самолеттарҙы уйлап табыусы

Канадала тыуып-үҫкән Жозеф-Арманд барлыҡ балалар кеүек уҡ уйынсыҡтар ярата. Ун өс йәшендә үҙенең тәүге эшен, сәғәт деталдәрен файҙаланып, йөрөй алған паровоз яһай. Оҙаҡламай уға механик кәмә, трактор һәм башҡа уйынсыҡтар өҫтәлә.

Шул саҡта яҡындары уның инженер һәләтенә ышана. Һарайҙа иҫке тегеү машинкаһы табып, шунан пар двигателе яһай. Уны Мэри исемле инәһенең йөн иләгесенә беркетә. Ә йөн иләгес туктауһыҙ эшләһен өсөн, пар двигателе аҫтына яғырға утын һалып торорға ғына кәрәк. Жозеф-Арманд Бомбардье ун биш йәшендә механик сана эшләй башлауы тураһында ла әйтә. Ысынлап та, бер заман һарайҙан ныҡ итеп гөрһөлдәгән тауыш ишетелә. Жозеф-Арманд Бомбардье барлыҡ күршеләрен аптырауға һалып, бик көслө тауышлы бер ҡоролмаға ҡустыһын да ултыртып, елдереп килеп сыға ла, урам буйлап ары китә. Уға балалар "механик йөнлек" тигән исем ҡушалар. Аллы-артлы беркетелгән ике санаға Форд автомобиленең двигателе һәм самолет пропеллеры ҡуйылған бер яйлама була ул. 1923 йылда әле үҫмерҙең механик йөнлеген күптәр баһаламай, тарихи ваҡиғаға - донъяла беренсе ҡар йөрғыстың тыуыуына шаһит икәндәрен дә аңламайҙар. Атаһы ла улдарын башта шелтәләй, шунан Жозефты ситкәрәк алып китеп, мотосана эшләй алғаны өсөн ғорурланғанын әйтә. Хәҙер Жозеф-Арманд яйға һалған компания Бомбардье исемен йөрөтә. Һәм уны күберәк самолет етештереүсе фирма булараҡ беләләр, шул уҡ ваҡытта фирма ҡар йөрғыстар етештереүҙә лә туҡтатҡаны юҡ. Үҙ ғүмерендә Жозеф-Арман Бомбардье 40 патент ала.

**(Дауамы бар).**



### 23 МАЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Возвращение". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "Версия". [16+]
4.28 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Город особого назначения". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Греко-римская борьба. Первенство России по спортивной борьбе среди юношей до 16 лет. Финалы.**
**15.30 "Бай". [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 20.45, 4.30 История одного села. [12+]**
**17.45 Ради добра. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00, 4.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Т/с "Любовь по приказу". [12+]**
**2.30 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]**
**4.45 Честно говоря. [12+]**

### 24 МАЯ
### ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Возвращение". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "Версия". [16+]
4.28 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Город особого назначения". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Хазина. [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30 "КультУра". [6+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Нык бул. [6+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Любовь по приказу". [12+]**
**3.00 Спектакль "Любовь на троих". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**

### 25 МАЯ
### СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Любовь вопреки". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "Версия". [16+]
4.28 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Город особого назначения". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30, 5.00 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Т/с "Любовь по приказу". [12+]**
**3.00 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**
**4.45 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 26 МАЯ
### ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.50 Т/с "Земский доктор. Любовь вопреки". [12+]
2.45, 3.30 Т/с "Версия". [16+]
4.28 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Город особого назначения". [16+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Бай баҡса. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Ап-асыҡ. [12+]**
**0.00 Т/с "Любовь по приказу". [12+]**
**3.00 Спектакль "Гильмияза". [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 27 МАЯ
### ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Х/ф "Слабая женщина". [12+]
3.25, 4.10 Т/с "Версия". [16+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Д/ф "АтАй ҡыҙы". [6+]**
**10.45, 15.00, 20.30 Интервью. [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 23.15 "Йома". [0+]**
**11.45, 17.00 Территория женского счастья. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.45 Ради добра. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**22.00, 5.00 БашГост. [12+]**
**23.00 Специальный репортаж. [12+]**
**23.45 Х/ф "Контуженый, или Уроки плавания вольным стилем". [12+]**
**1.45 Спектакль "Раб божий предполагает". [12+]**
**3.15 Колесо времени. [12+]**
**4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 28 МАЯ
### СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Т/с "Катерина". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Свадебный марш". [16+]
0.35 Х/ф "Провинциалка". [12+]
4.00 Х/ф "Судьба Марии". [16+]
5.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 "Автограф". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "КультУра". [6+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Нык бул. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 22.00 Автограф. [12+]**
**13.30, 5.15 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Бай баҡса. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Спектакль "Черная курица, или Подземные жители". [12+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.30, 2.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Курай даны". [12+]**
**1.45 Х/ф "Контуженый, или Уроки плавания вольным стилем". [12+]**
**3.15 Спектакль "Счастье". [12+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 29 МАЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.40, 3.15 Х/ф "Золотые небеса". [16+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Т/с "Катерина". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Вальс-Бостон". [12+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Орнамент". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 "Дорога к храму". [0+]**
**15.30 Историческая среда. [12+]**
**16.00 Спектакль "Корова". [12+]**
**16.45 Финал Башкирской Юниор лиги КВН. [12+]**
**17.45 Концерт, посвященный 90-летию со дня рождения народного поэта Рами Гарипова. [12+]**
**19.45 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00, 4.00 Х/ф "В плену у Сакуры". [16+]**
**1.00 Спектакль "Дурочка". [12+]**
**3.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**24 май "Эңер төшкәс"** (А. Дударев), мелодрама. 12+
**26-27 май Премьера! "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова), мелодрама. 16+
**27 май Премьера! "Осҡон осто, янғын сыҡты"** (А. Ишбулдина), әкиәт. 12.00 0+
**28 май "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**25 май Премьера! "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев), трагикомедия. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:**
**29 май "Кошкин дом"** (С. Маршак). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**25 май "100 лет российскому джазу"**. 6+
**"Бах и Шопен"** концерт. 0+
**26 май** Орган залында 83-сө концерт миҙгелен ябыу тантанаһы. 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**27 май "Һырғалаҡ"** (А. Житковский), балалар баҡсаһы хроникаһы. 89-сы ижад миҙгелен ябыу. 16+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**25 май "Башмағым"** (Т. Ғиззәт), музыкаль комедия. 12+
**27 май "Тау артында ниҙәр бар?"** (Т. Ғиниәтуллин, Н. Ғәйетбай инсц.) спектакле менән Өфөлә гастролдә. 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1443 һижри йыл.*

| Май (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (22) дүшәмбе | 3:29 | 4:59 | 13:30 | 18:47 | 21:26 | 22:56 |
| 24 (23) шишәмбе | 3:28 | 4:58 | 13:30 | 18:48 | 21:28 | 22:58 |
| 25 (24) шаршамбы | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 18:48 | 21:29 | 22:59 |
| 26 (25) кесе йома | 3:25 | 4:55 | 13:30 | 18:49 | 21:31 | 23:01 |
| 27 (26) йома | 3:24 | 4:54 | 13:30 | 18:50 | 21:32 | 23:02 |
| 28 (27) шәмбе | 3:23 | 4:53 | 13:30 | 18:51 | 21:34 | 23:04 |
| 29 (28) йәкшәмбе | 3:22 | 4:52 | 13:30 | 18:52 | 21:35 | 23:05 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 20 ЙЫЛ

# ӨМӨТТӘРЕБЕҘ АҠЛАНҺЫН, ТИП...

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле бара. Халыҡ гәзит-журнал-китап уҡыуҙан төңөлә бара, тип уфтанылһа ла, дуҫтарыбыҙҙы бөтөнләй юҡ югалтып бөтмәгәнбеҙ икәненә ышанабыҙ. Бар әле гәзит һүҙен үҙ иткәндәр, "Гәзиттә бит шулай яҙылған!" тип, һәр һүҙен гәзит һүҙе менән йөпләүселәр - улар беҙҙә ҡағыҙ баҫмаларҙың киләсәктә лә йәшәйәсәгенә өмөт уята. Шулай итеп, 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 757 һум 80 тингә яҙылып ҡуйһағыҙ, беҙ был өмөттөң аҡланыуынан дәртләнеп, уҡыусыларыбыҙҙы рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ.**

• Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ.

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен.

• **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ, тимәксебеҙ.

• **Почтальондар иғтибарына!** Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең егәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләмәксебеҙ. Иң күп "Киске Өфө"гә яҙҙырыусы почта хеҙмәткәрҙәрен бүләктәр көтә.

• **Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың шундай юлдары ла бар:**

- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға 336 һум.
- Коллектив менән яҙылыусыларға (кәмендә 5 дана) гәзит ярты йылға шулай уҡ 336 һумға төшәсәк, уларға баҫманы редакция үҙе килтереп бирәсәк.

• Йәшәгән йортобоҙ подъезында почта йәшниктәре юҡ, тип зарланыусылар **"Өфөматбуғат"** ("Тотум" ЯСШ) киоскыларында арзаныраҡҡа - **540 һумға яҙылып**, почтальон килгәнен көтмәй, һәр шәмбе һайын үҙе барып алып йөрөй ала. **Киоскыларҙың адрестарын тәҡдим итәбеҙ.**

| Киоск № | Адрес |
|---|---|
| 4 | Октябрь проспекты, 52-се йорт эргәһендә |
| 13 | Октябрь проспекты, 28-се йорт эргәһендә |
| 14 | Гагарин урамы, 25 – Королев урамы сатында |
| 15 | Октябрь проспекты, 9-сы йорт эргәһендә |
| 17 | Кувыкин урамы, 14-се йорт эргәһендә |
| 18 | Октябрь проспекты, 134-се йорт эргәһендә |
| 22 | Октябрь проспекты, 18-се йорт эргәһендә |
| 28 | Ухтомский урамы, 20-се йорт эргәһендә |
| 31 | Әй урамы, 89-сы йорт эргәһендә |
| 35 | Октябрь проспекты, 106-сы йорт эргәһендә |
| 40 | Беренсе Май урамы, 51-се йорт эргәһендә |
| 42 | Невский урамы, Ҡулса урамы буйлап 127-се йорт эргәһендә |
| 44 | Кувыкин урамы, 1В йорто эргәһендә |
| 48 | Вологда урамы, 34-се йорт эргәһендә |
| 53 | Рыльский урамы, 17-се йорт эргәһендә |
| 57 | Беренсе Май урамы, 37-се йорт эргәһендә |
| 63 | Октябрь проспекты, 112-се йорт эргәһендә |
| 69 | Беренсе Май урамы, 80-се йорт эргәһендә |
| 74 | Ульяновтар урамы-Беренсе Май урамы, 27-се йорт эргәһендә |
| 78 | Октябрь проспекты, 74-се йорт эргәһендә |
| 83 | Ҡулса урамы, 14-се йорт эргәһендә |
| 85 | Октябрь проспекты, 107-се йорт эргәһендә |
| 89 | Октябрь проспекты, 53-сө йорт эргәһендә |
| 90 | Октябрь проспекты, 162-се йорт эргәһендә |
| 93 | Ст. Кувыкин урамы, 35-се йорт эргәһендә |
| 101 | Октябрь проспекты, 135-се йорт эргәһендә |
| 113 | Ухтомский урамы, 13-сө йорт эргәһендә |
| 114 | Октябрь проспекты, 23-сө йорт эргәһендә |
| 117 | Достоевский урамы, 112-се йорт эргәһендә |
| 119 | СССР-ҙың 50 йыллығы урамы, 47-се йорт эргәһендә |
| 120 | Ғафури урамы, 50-се йорт эргәһендә |
| 123 | Орджоникидзе урамы, 15-се йорт эргәһендә |
| 124 | Р.Зорге урамы, 44-се йорт эргәһендә - СССР-ҙың 50 йыллығы урамы |
| 126 | Беренсе Май урамы, 100/1Г йорто эргәһендә - Машина эшләүселәр урамы |
| 129 | Ферин урамы, 6-сы йорт эргәһендә |
| 133 | Борисоглебский урамы, 5-се йорт эргәһендә |
| 135 | Менделеев урамы, 7/3 йорто эргәһендә |
| 139 | МВД мәктәбе туҡталышы, Перовская урамы. 21/1 йорто эргәһендә |
| 145 | Т. Йәнәби урамы, 51-се йорт эргәһендә |
| 153 | Мушников урамы, 11-се йорт эргәһендә |
| 158 | 21-се дауахана |
| 159 | Әхмәтов урамы, 324-се йорт эргәһендә |
| 165 | Беренсе Май урамы, 19-сы йорт эргәһендә |
| 168 | Бикбай урамы, 26-сы йорт эргәһендә |
| 188 | Октябрь проспекты, 178-се йорт эргәһендә |
| 1 | Үҙәк баҙар |



• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА



## МУЙЫЛ

**Яҙ батшабикәһе, тип атайҙар был ап-аҡҡа төрөнгән хуш еҫле ағасты. Ул сирень менән ярышып, йыш ҡына алдараҡ сәскә ата. Яңы ғына сәскә атҡан муйыл төбөндә ял итеүе - үҙе бер ғүмер!**

Эйе, муйыл еҫенән баш еңелсә әйләнеүе бар. Был фитонцидтары араһында "йәшеренгән" синиль кислотаһы касафаты. Япраҡтары бөтөн булғанда ул амигдалин гликозиды рәүешендә була. Ә бына япраҡтарҙы тартҡылап өҙгөсләһәң! Ваҡланған муйыл япраҡтарын берәй ҡапҡас аҫтына һалып, шунда сыҫҡан йәки ҡомаҡты урынлаштырғанда улар сама менән ун минуттан ағыуланып үләсәк. Синиль кислотаһы амигдалин рәүешендә муйылдың бөтә өлөштәрендә лә бар, бигерәк тә һөйәгендә күп.

Муйылдың сәскәһе һәм емешенән генә түгел, япрағы һәм ҡайырыһынан да дауа әҙерләйҙәр. Емештәре бешкән һыуҙы эс киткәндә, гастрит булғанда, тиреләге бәшмәк ауырыуҙарынан эсәләр. Ҡатын-ҡыҙҙар трихомонада кольпиты, аҡ килеү ваҡытында муйыл емеше төнәтмәһен һиптереп йыуына. Сәскәләренән яһалған төнәтмәне ашҡаҙан аҫты биҙе, енел формалағы диабет булғанда эсәләр, ауырыған күҙҙәрҙе сайлар.

Муйыл ҡайырыһы төнәтмәһен биҙгәк тотҡанда, һыуыҡ тейҙереп, йүтәлләп, цистит менән ауырығанда балғалаҡлап ҡына эсәләр. Борон имселәр муйыл ярҙамында подагра, ревматизм, үпкә туберкулезын дауалаған. Әлегә тиклем дә сиҡан сыҡҡанда һәм эренле яраларҙы дауалағанда муйыл сәскәһенән сылатҡыстар эшләү иң һөҙөмтәлеһе иҫәпләнә. Муйыл төнәтмәһе теш кариесын дауалауҙа иң киҫкен сараларҙың береһе. Муйылда Е, Р, С витаминдары күп булыуы уны импотенцияны дауалауҙа файҙалы итә.

**Ҡайтмалы кольпит, аҡ килеү.** 1 ҡалаҡ муйыл сәскәһен йәки емешен термосҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Шунан 6-10 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр һиптереп йыуыныу өсөн ҡулланырға.

**Полиартрит.** 5 грамм муйыл ҡайырыһына 1 стакан һыу ҡойоп, ҡайнар хәлгә еткерергә һәм тағы 15 минут утта тотоп алырға, ярты сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Эске ағзалар яман шеше.** Эмалле йәки быяла һауытҡа 2 ҡалаҡ киптерелгән муйыл сәскәһен һәм 2 ҡалаҡ йәш ботаҡтарынан һыҙырып алып киптерелгән ҡайырыһын һалырға. Өҫтөнә 3 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, йылыға төрөп, 6-8 сәғәт төнәтергә. Төнәтмә ҡара шарап төҫөнә инергә тейеш. Шунан һөҙөргә һәм ҡалдыҡтарын һығып алырға. Төнәтмәне һыуыҡ урында 2 тәүлектән дә артыҡ һаҡламаҫҡа. Дауаны көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда йылы көйөнсә сәй һымаҡ итеп яртышар стакан эсергә.

**Иҫкәрмә.** Муйыл емешендә амигдалин булыуын хәтерҙә тоторға кәрәк. Ул аш һендереү ағзаларында тарҡалып, синиль кислотаһын барлыҡҡа килтерә. Шуға артыҡ күп ҡулланыу ағыуланыуға килтерергә мөмкин. Шулай уҡ муйылды эс ҡатҡанда, геморрой, тура эсәктә ярыҡтар булғанда ҡулланырға ярамай. Йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға муйыл ярҙамында дауаланыу (бөтә төрҙәре менән дә) ҡәтғи тыйыла.

**Рим ӘХМӘДОВ китабынан.**

АФАРИН!

# БЫЛ БӘЙГЕ...

## ҡурайсыларҙың кимәлен үҫтерә

**Башҡортостанда БАССР-ҙың халыҡ артисы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Ғата Сөләймәновтың 110 йыллығы айҡанлы Октябрьский ҡала мәҙәниәт һарайында уҙған XXI Республика ҡурай байрамы еңеүселәре иғлан ителде.**



Гран-призы Учалынан Тәфтизән Зәйнишев яуланы, ә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының Әҙеһәм Исҡужин исемендәге ҡурайсылар ансамбле (Өфө), Буранбай сәсән исемендәге ҡурайсылар ансамбле (Баймаҡ районы), "Яйыҡ" халыҡ ҡурайсылар ансамбле (Учалы), Рөстәм Хәбиров (Туймазы), Иршат Дауытов (Ғафури районы), Айнур Собханғолов (Федоровка районы) һәм Вилдан Дәүләтбирҙин (Өфө) I дәрәжә лауреат исеменә лайыҡ булды. "Ҡурай символ булараҡ башҡорт халҡының традицияларын ихтирам иткәндәрҙең һәм һаҡлағандарҙың һәммәһен дә үҙе тирәләй йыя. Республикабыҙ гербында һәм флагында ла ҡурай сәскәһе төшөрөлгән. Ул, элекке кеүек, ата-бабалар хәтерен һәм Башҡортостандың күп милләтле халҡының дуҫлығын аңлата", - тип билдәләне мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова. Был күркәм сара тураһында унда ҡатнашыусыларҙың фекерҙәрен гәзит уҡыусыларыбыҙға ла еткерәбеҙ.

***Мөхәмәт Түлебаев, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре, конкурстың жюри рәйесе:*** Быйыл Октябрьский ҡалаһында Ғата Сөләймәнов исемендәге Республика ҡурай байрамы, шөкөр, егерме беренсе тапҡыр уҙғарылды. Унда йыл да йөҙәрләгән ҡурайсы ҡатнаша һәм ярыштың кимәле күтәрелә генә бара. Шул тиклем ныҡлы әҙерләнеп киләләр, хатта жюри ағзаларына улар араһынан һанаулы ғына кешегә иң юғары баһа биреүе лә еңелдән түгел. Шулай ҙа лайыҡлылар араһында лайыҡлыны һайлап, төп призды Учалынан Тәфтизән Зәйнишевҡа бирҙек. Ул бик күптән эшләгән данлыҡлы ҡурайсы, яҡшы педагог. Әйтергә кәрәк, башҡа район-ҡалаларҙан йыйылған йыр-моң һөйөүселәр ҙә һынатманы, бик ҡәнәғәт ҡалдыҡ.

Балалар яңы үҫеп килгән сәскәләр һымаҡ бит ул. Йә береһе өҫкә сығып китә, йә икенсеһе. Шуға конкурста ҡатнашыусылар араһында бер үк йөҙҙәр булмай һис, улар шул тиклем ярышып үҫәләр. Һәм гел бер кешеләр генә лә еңеүсе булып тормай. Сөнки һәр уҡытыусы ҡыҙыҡһына, тәрбиәләнеүселәрен дәртләндереп әҙерләй. Был инде беҙҙең конкурстың төп маҡсатына - йәш ҡурайсыларҙы үҫтереүгә ауаздаш. Ҡурайҙа уйнаған балаларға ҡурайсының әхлаҡи ҡиммәттәре тураһында ла аңлатабыҙ, уларға тәртипле һәм тәрбиәле булырға өйрәтәбеҙ, был иһә башҡорт халҡы өсөн оло әһәмиәткә эйә. Сөнки ҡурайсы - ул милләтебеҙ ғорурлығы. Борон да, бөгөн дә һәм киләсәктә лә абруйлы, халҡыбыҙҙың йолаларын һаҡлап ҡалыр кеше булырға тейеш ул. Шуға иң бәләкәй ҡатнашыусыларҙы ла йәлеп итергә тырышабыҙ, конкурсҡа 6-7 йәшлек ҡурайсылар килә. Улар ҡурайын өрөп, көй сығара беләләр, әллә ни булдыра алмаһалар ҙа, килеүҙәре шарт. "Бына ниндәй ҡурайсы килгән!" - тип маҡтап, ҡанатландырып торабыҙ. Беҙҙең арттан алмаш үҫеп килеүен күреп шатланабыҙ. Бер аҙҙан нәҡ улар сәхнәләрҙә профессиональ ҡурайсы булараҡ сығыш яһап йөрөйәсәк бит. Әммә бына был конкурсҡа республикабыҙҙың күп кенә райондарынан ҡатнашыусылар һирәгәйеүе күңелде ҡыра. Бөгөн Күгәрсен, Бөрйән, Әбйәлил, Йылайыр, Ейәнсура райондарынан ҡатнашыусылар булмауы бик йәл. Ҡасандыр гөрләп торған шул районларҙың ал-ял бирмәй эшләгән матур ансамблдәре була торғайны. Бының төп сәбәбе, әлбиттә, аҡса мәсьәләһенә бәйле. Урындағы етәкселек был йәһәттән тейешле хәстәрлек күрһен ине, тигән теләктә ҡалам. Ә шулай ҙа был юлы Октябрьский ҡалаһының мәҙәниәт һарайын дер һелкетеп, өс йөҙҙән ашыу ҡурайсы "Урал" башҡорт халыҡ йырын ҡурайҙа яңғыратып ҡайттыҡ әле...

***Эльвира Әхмәтйәнова, Республика халыҡ ижады үҙәгенең халыҡ ижады бүлеге етәксеһе, конкурстың баһалама ағзаһы:*** Быйыл конкурста Башҡортостандан һәм Силәбе өлкәһенән 334 музыкант, шул иҫәптән 93 солист һәм 22 ижади коллектив ҡатнашты. Сибайҙан 8 йәшлек Арыҫлан Хәсәнов "Иң йәш ҡатнашыусы" тип, ә Баймаҡ районынан килгән 65 йәшлек Риф Ҡәйепҡолов иң олоһо тип табылды. Был конкурста йыл һайын ҡатнашыусылар һаны төрлөсә була, ҡайһы ваҡытта 200-ҙән ашыу, ҡайсаҡ 400-500 дәғүәсе лә йыйыла. Күпме кеше ҡатнашыуға ҡарамаҫтан, шул тиклем матур итеп әҙерләнеп киләләр барыһы ла. Учалы, Миәкә, Туймазы, Бәләбәй, Әлшәй, Баймаҡ, Ҡырмыҫҡалы, Хәйбулла райондары, Сибай ҡалаһы йыл да әүҙем ҡатнаша. Быйыл Дыуан районы беренсе тапҡыр ҡатнашты, улар бер йәш кенә ансамбль төҙөгәндәр. Өфө ҡалаһынан да ҡурайсылар күп килә конкурсҡа, бигерәк тә Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының Ә. Исҡужин исемендәге ҡурайсылар ансамбле йыл да үҙ оҫталыҡтарын һынай. Ғөмүмән, Башҡортостандың егермегә яҡын төбәгенән ҡатнашыусылар була, сит өлкәләрҙән дә милләттәштәребеҙ килеп, үҙ маһирлығын күрһәтә, тәжрибә уртаҡлаша. Быйыл Силәбе өлкәһенән ансамбль һәм бер айырым сығыш яһаусы ҡурайсы булды.

Конкурс Башҡортостандың көнсығыш райондарында ҡурайсыларҙы, был милли уйын ҡоралында уйнау оҫталығын үҫтереү, уны киң таратыу йәһәтенән бик әһәмиәтле ярыш. Октябрьский ҡалаһының етәкселеге лә быны аңлап, йыл да уны үткәрергә ҡуш ҡуллап ризалыҡ биреп кенә тора. Шуны билдәләп китергә кәрәк: ошо ике тиҫтәнән ашыу йыл эсендә конкурс бик күп яңы таланттарҙы асыҡланы, күптәрҙең ижади ялҡынын ҡабыҙҙы, оҫталығын арттырҙы. Унда балаларҙың күп ҡатнашыуы иң ҡыуанyслы күренеш һәм мин уларҙың үҫеп етеп, күбеһе үҙ киләсәген сәнғәт, ҡурай менән бәйләүенә лә шаһитмын. Тимәк, конкурс уларға яңы үрҙәргә ынтылырға көс биргән, рухтарын уятҡан.

***Тәфтизән Зәйнишев, конкурста Гран-при яулаған профессиональ ҡурайсы:*** Ғата Сөләймәнов исемендәге Республика ҡурай байрамы башланып киткән тәүге йылдарҙа уҡ ҡатнашыу теләгем, ынтылышым булһа ла, төрлө сәбәптәр менән конкурсҡа бара алмай ҡалына ине. Әммә бына һуңғы ун йылда үҙем эшләгән С. Низаметдинов исемендәге Учалы сәнғәт һәм мәҙәниәт колледжының "Яйыҡ" ҡурайсылар халыҡ ансамблен әҙерләп, йыл да ҡатнашып киләбеҙ. Был конкурс башҡаларынан айырыуса етди әҙерлек талап итеүе менән айырылып тора. Сөнки профессиональ ҡурайсыларға талаптар бик ҡаты: әгәр 100 көйҙө төрлө варианттары, кемдәр башҡарыуы, тарихы менән белмәһәң, һынауҙан үтмәйһең. Шуның өсөн сәхнәләрҙә сығыш яһаған күп кенә ҡурайсылар ҙа ҡатнаша алмай унда. Ярыш ҡурайсыларҙың кимәлен үҫтерә. Был минең студенттарымда уҡ асыҡ сағыла, унда ҡатнашып, күҙгә күренеп үҫеп ҡайталар. Быйыл ансамблебеҙ составында 11 бала сығыш яһаны һәм тырышлыҡтарының һөҙөмтәһе булып, беренсе урын яулап ҡайттылар. Улар өсөн тағы бер ҡыуанған нәмә шул булды: сара сиктәрендә Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың халыҡ артисы, ҡурайсы һәм фольклорсы Юлай Ғәйнетдиновтың бик мәғәнәле оҫталыҡ дәресен тыңлау бәхетенә ирештеләр.

Ә үҙемдең еңеүем тураһында һөйләгәндә инде, бик етди әҙерләндем. Хатта конкурстан ике ай алда йәшәү рәүешемә үҙгәрештәр индерҙем: көн дә сәғәт таңғы дүрттә тороп, белергә тейешле көйҙәрҙе ебәреп, алтыла эшкә сығып киткәнгә тиклем тыңлап, көйләп йөрөргә ғәҙәтләндем. Шуға һәр йөҙ көй хәтерҙә, ниндәй билетты тартып алһам да, унда күрһәтелгән йырҙың барлыҡҡа килеү тарихы, кем башҡарыуы, ниндәй төрҙәре барлығы күҙ алдына баҫып ҡына торҙо. Конкурста мин "Түрәкәй" тигән башҡорт халыҡ йырын яратып башҡарҙым, "Ашҡаҙар"ҙы уйнаным һәм тартып алынған билет буйынса "Һыр" көйөн яңғыраттым. Үҙ өҫтөмдә эшләүҙең дә, педагог булараҡ та хеҙмәтемдең, тырышлығымдың һөҙөмтәләрен күреп, ҡыуанырға яҙҙы, шөкөр.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҢҠАУ АУЫЛҒА...

## арамъя мулла

Азамат ирҙең билдәһе - аҙ һөйләр ҙә күп тыңлар. Арғымаҡ аттың билдәһе - аҙ уртлар ҙа күп юшар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Рәнйетелгәндәрҙең рәнйешенән ҡурҡ, сөнки уларҙың зары Хоҙайға бер ҡаршылыҡһыҙ барып етә.

**(Мөхәммәт бәйғәмбәр).**

Ғүмер бирәүгә лә мәңгелеккә бирелмәй, ул ваҡытлыса биреп кенә торола.

**(Лукреций).**

Ҡырын ҡылыҡ яҙаһыҙ ҡалмай, ҡырын ҡылыҡлы булыу үҙе үк яҙа.

**(Боэций).**

Халыҡҡа хеҙмәт итеү Хоҙайға хеҙмәт итеү менән бер.

**(Роберт Браунинг).**

Бер нәмә лә эшләмәү - иң ауыр эш.

**(Оскар Уайльд).**

Ҡурҡаҡ - ул иң хәүефле мәлдә аяҡтары менән уйлаусы.

**(Джозеф Аддисон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Аҡыл эйәһенә ҡысҡырып илап бер малай килеп ингән.**

**- Мин яңылыш ҡына бер күбәләкте үлтерҙем, - тип үкһегән ул. - Әсәйемдең: "Кемдеңдер ғүмерен өҙөү - ул иң оло гонаһ",- тиеүе гел ҡолаҡ төбөмдә яңғырап тора. Мин бит хәҙер оло гонаһ эйәһе...**

**- Әсәйең дөрөҫ әйткән, - тигән аҡыл эйәһе. - Ләкин һин кемдеңдер ғүмерен бик теләп, был ғәмәлеңдән ләззәт алып өҙһәң генә ул гонаһ тип һанала. Насар һауа торошо арҡаһында, йә ҡоштар һөжүменән көн һайын ерҙә меңәрләгән күбәләк үлә, ләкин быға тәбиғи күренеш тип бер кем дә иғтибар итмәй...**

**- Ләкин әсәйемдең иҫкәртеүе күңелемдә бер төйөр һымаҡ, ҡылған ғәмәлем өсөн ғәйепләгән тауышы ҡолағымда яңғырап тик тора... - тип үкһеүен дауам иткән малай.**

**- Улай булғас, әсәйеңдең тауышына аңлатып ҡара уның дөрөҫ әрләмәгәнен, - тип кәңәш биргән аҡыл эйәһе.**

**Аптырабыраҡ ҡалған малай ауыҙ эсенән генә ниҙер шыбырлап торған да, ҡапыл йылмайып, ҡайҙалыр йүгереп сығып киткән. Шатлығынан хатта аҡыл эйәһенә рәхмәт әйтергә лә онотҡан.**

**- Кеше тигәнең үҙ-үҙенә ауырлыҡтар уйлап табырға шул тиклем оҫта һәм ул ауырлыҡтарға ҡаршы көрәшеү, уларҙы еңеп сығыу уға сикһеҙ шатлыҡ килтерә, - тип ауыр һулыш алған аҡыл эйәһе. - Ә шулай ҙа, күбәләк йәл бит әле, бәлки, ул да кемдеңдер йән дуҫы булғандыр..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22020

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
20 май 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 616